ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14-20 август (урағай) 2021

№33 (971)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Балаларҙың тәбиғәтенә

һәм теләгенә ҡаршы килмәгеҙ



2-3

Бал ҡортоноң балы бар,

балдан алда наҙы бар



7

Һеҙҙе нимәнән тыйҙылар?



10

Көньяҡ Урал төбәгенең...

төп мәғариф үҙәге



12-13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың икенсе яртыһында ла "Киске Өфө" менән дуҫлыҡҡа тоғро ҡалғанығыҙ өсөн оло рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ. Ә хәҙер 2022 йылдың беренсе яртыһы тураһында ваҡытынан алда хәстәрлек күреп, июль-август айҙарында "Киске Өфө"гә 6 айға - 692 һум 94 тингә, 3 айға - 346 һум 47 тингә яҙыла башлай алаһығыҙ. Бергә булайыҡ!***

*ҒАИЛӘ ҠОРО*

# ИЖАДҠА ҒАШИҠТАР...

## үҙҙәренең йөрәк тауышын тыңлай белә

**Психологтарҙың күбеһе тиерлек бәхетле булыр өсөн ғаиләнде, эшенде, туғандарыңды айырып ҡарарға кәңәш итә. Йәнәһе лә, ишегенде ябып сығыу менән эшенде онот. Ә эштә балаларың, икенсе яртың, яҡын кешеләренде уйлама. Ысынында, кеше үҙен бәхетле тойор өсөн үҙен уратып алған бөтә нәмә - ғаилә ағзалары, һөнәри эшмәкәрлеге, яҡындары, ятаҡан шөғөлдәре бер тулҡында һәм һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға тейеш. Быйыл Башҡорт ғаиләһе көнө сиктәрендә үткәрелгән "Өлгөлө башҡорт ғаиләһе - 2021" асыҡ республика конкурсында "Ғаилә ижады" номинацияһында икенсе урын яулаған Әҙһәм Исҡужин исемендәге Балалар музыка мәктәбе педагогтары Гөлсәсәк һәм Заһир ШӘҺӘРҒАЗИНдар менән әңгәмәләшкәндән һуң был фекер тағы ла нығынды. "Ғаилә, эш, балалар, туғандар бер-береһе менән шул тиклем ныҡ бәйләнгән. Уларҙың береһен генә лә өҫтөнөрәк күреп, икенсеһенә иғтибарҙы кәметеү ҙә кеше тормошон түңәрәк иткән бар өлкәләргә лә үҙгәреш индерә", - ти мәҡәләбеҙ геройҙары. Баш ҡалала йәшәгән был музыкаль ғаиләлә һәр ваҡыт бер-береңә ышаныу, ярҙам итеү, яратыу һәм бер-береңде хәстәрләү мөхите урынлашҡан. Һәм бында барыһы ла үҙенең һөйөклө кеше икәнен, күңел офоҡтарын киңәйтеүсе йылы һүҙҙәр әйтеүсе яҡындары барлығын белә. Бәхетле атай-әсәй эш сәғәттәре тамамланыу менән күҙҙәренә ҡарап торған, йылы һүҙен, йылы ҡарашын көткән балалары янына ашыға... Шәһәрғазиндар "Киске Өфө" гәзите уҡыусыларына татыулыҡ, берҙәмлек серҙәре тураһында һөйләй.**



**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

*АФАРИН*

# УҢАЙЛЫРАҠ БУЛАСАҠ!

**Өфөлә Салауат Юлаев проспекты һәм Зәки Вәлиди урамы киҫелешендәге юлүткәргесте техник асыу тантанаһы үтте.**



Төҙөлөш быйыл 8 ғинуарҙа башланғайны. Объектта Өфөнөң 30-сы һәм Пермдән 123-сө Күпер төҙөү отрядтары эшселәре тәүлек әйләнәһенә эшләне һәм уны ваҡытынан алда файҙаланыуға тапшырыуға өлгәште. Юл үткәргес алты һыҙатлы, йәғни ике яҡҡа ла өсәр һыҙаттан тора. Уны төҙөгәндә башлыса республикала етештерелгән асфальт-бетон ҡатнашмалар, материалдар ҡулланылған. Юлүткәргестең һыҙаттарын арттырыу уның үткәреү һәләтен дә өс тапҡырға арттырҙы. Бынан тыш, күперҙең тороғо ла оҙайтылды һәм Салауат Юлаев проспектына хәүефһеҙ боролош яһау мөмкинлеген тәьмин итте.

Ҡоролманы техник асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты һәм юлүткәргес аша хәрәкәткә старт биреп, былай тине: "Был юлүткәргесте төҙөү быйыл декабрҙә генә тамамланырға тейеш ине. Уны ваҡытынан алда тамамлау өсөн ҙур тырышлыҡ һалған төҙөүселәргә ҙур рәхмәт. Был объектта эштәр дауам итәсәк әле. Юлүткәргесте Ағиҙел аша быйыл көҙ төҙөлөп бөтәсәк яңы автомобиль юлы менән тоташтыраһы бар. Иң мөһиме, был объект ҙур транспорт ағымына иҫәпләнгән. Тимәк, бында тығындар аҙыраҡ, юл йөрөү уңайлыраҡ буласаҡ".

12+

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# ҒАИЛӘБЕҘ ДУҪЫ УЛ



**"Киске Өфө" - минең яратып уҡыған баҫмам. Сыға башлағандан алып уға яҙылмай ҡалғаным юҡ. Уны мин хатта ғаилә дуҫыбыҙ тип йөрөтәм. Фәһем алырлыҡ, тормошта ҡулланырлыҡ материалдар бик күп унда. Төрлө йәштәгеләр, төрлө һөнәр эйәләре һәм һәр кемдең ҡыҙыҡһыныуына, зауығына тура килгән фекерҙәр йыйынтығы һымаҡ ул.**

Бигерәк тә "Әйт, тиһәгеҙ...", "Фекер ҡоро", "Шаңдау", "Диалог"рубрикаларындағы материалдарҙы ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Унда йәмғиәтебеҙҙә барған һуңғы ваҡиғалар, яңылыҡтар, закондағы төрлө үҙгәрештәр тураһында яҙыла, гәзит уҡыусылар, билдәле шәхестәр менән уларға ҡарата алтын урталыҡта булған ҡараш формалаштырыла. Матур, өлгөлө ғаиләләр тәжрибәһен һүрәтләү - йәштәр өсөн үҙе бер тәрбиә мәктәбе. Төрлө өлкәләге белгестәр, зыялылар менән әңгәмәләр ҙә рухты күтәреп, аңды уятып ебәрә. Шуның менән әһәмиәтле был рубрикаларҙағы яҙмалар.

"Киске Өфө"гә даими яҙышҡан авторҙар күп. Хәлил Һөйөндөков, Әғләм Шәрипов, Арыҫлан Таймасов, Әхмәр Үтәбаевтарҙың сығыштарын һәр уҡыусы көтөп ала икәнен беләм. Сөнки йыш ҡына "Киске Өфө"нө уҡыған иптәштәр менән ошо яҙмалар буйынса фекер алышып алырға ла тура килә.

Гәзиттә халыҡ медицинаһына етди иғтибар бирелә, "Шифа" битен ғаиләбеҙ менән яратып уҡыйбыҙ. Ундағы дауаланыу, ауырыуҙарҙы иҫкәртеү, һаулыҡты нығытыу буйынса ябай ғына, әммә бик мөһим кәңәштәрҙе беҙ бик яратып ҡулланабыҙ, ул яҙмаларҙы йыйып барабыҙ. Шифа беҙҙең аяҡ аҫтында ғына бит. Шуны беләбеҙ, өләсәй-олатайҙар һөйләгәнен дә хәтерҙә һаҡлайбыҙ, әммә ҡулланмайбыҙ, ә бына баҫма битендә шул кәңәштәр баҫылып сыҡһа, хәтер яңыра, үҙеңде ергә эйелергә, шул дауаларҙы йыйырға мәжбүр итәһең инде. Шулай уҡ гәзиттә әленәнәле сығып килгән врач кәңәштәре лә бик урынлы. Бынау тажзәхмәт тураһында ла башҡа сығанаҡтарҙан түгел, бары тик "Киске Өфө"ләге мәғлүмәттәрҙе генә көтөп алабыҙ, уларға ғына ышанабыҙ. Сөнки төрлөһө төрлөсә яҙа, төрлөсә "ҡурҡыта" бит халыҡты. Ә "Киске Өфө"ләге сығыштар ышандыра, урынлы ғына иҫкәртә.

Минә тағы ла ҡатмарлы тормош хәлендә ҡалып, унан сығыу юлын тапҡан ғибрәтле яҙмышлы кешеләр тураһында материалдар, әҙәби әҫәрҙәр оҡшай. Шул геройҙар тураһында уйланаһың, һабаҡ алаһың. Уңыш ҡаҙаныу серҙәренә арналған рубрикаларҙы ла яратып уҡыйбыҙ. Гәзиткә яҙылыусыларҙы тыуған көндәре менән ҡотлап, "Киске Өфө"ләрҙең изге теләктәрен еткереүе лә оҡшай.

Баҫманы уҡып, күңелгә ял алам, яңы белем, яңы тәжрибә менән танышам, уйланам. Үҙ-үҙеңде үҫтереү, күңелеңде байытыу сараһы ул "Киске Өфө". Республикала, илдә барған ваҡиғаларҙы дөрөҫ яҡтыртҡан, һәр кем аңларлыҡ, һәр кемдең күңеленә хуш килерлек йөкмәткеле булғаны өсөн рәхмәт белдергем килә был гәзиткә ижад итеүселәргә.

**Ғәйнетдин КАМАЛЕТДИНОВ.**
**Мәләүез районы Арыҫлан ауылы.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# БАЛАЛАРҘЫҢ ТӘБИҒӘТЕНӘ

## һәм теләгенә ҡаршы килмәгеҙ



**- Ниндәй һөнәр һайланың?**
**- Рәссам булырға хыялланам да ул. Атайым менән әсәйем ҡаршы шул.**
**- Нишләп улар ҡаршы?**
**- Улар минең иҡтисадсы булыуымды теләй...**

Уҡытыусы булып эшләгәнгә күрә, ошондайыраҡ йөкмәткеле диалогтарҙы йыш ишетергә тура килә. Ғөмүмән, берәүгә лә сер түгелдер, хәҙерге ваҡытта балаларға һөнәрҙе күпселек осраҡтарҙа ата-әсәләр һайлай. Уларға, ни өсөндөр, балаларыбыҙҙың хыялына ҡаршы киләһегеҙ, тигәнерәк һорау бирһәң: "Уларҙы үҙ иркенә ҡуйырға иртәрәк әле - тормошто аңлап етмәйҙәр бит, шуға беҙ уларға дөрөҫ юл һайларға ярҙам итергә тейешбеҙ",- тип яуап бирәләр.

...Нимә генә һөйләмәһендәр, ундай ата-әсәләр балаларын түгел, ә үҙҙәрен уйлай. Үҙҙәренең тормошҡа ашмаған хыялдарын балаларының тормошонда күрергә теләйҙәр. Хаталаныуҙарын уларҙың яҙмышы менән ҡапламаҡ булалар. Мәҫәлән, "Ғүмер буйы ябай кеше булып йөрөлдө, исмаһам, улыбыҙ ҙур кеше булһын", "Беҙҙең кеүек ярлы булмаһын өсөн нефтяник һөнәрен һайланыҡ", "Үҙем русса хөрт белдем, шуға рус синыфына бирҙек" (һ.б) тигәнерәк һүҙҙәрҙе аҙым һайын ишетергә тура килә. Минеңсә, бындай ҡарашлы ата-әсәләр балаларын айырым бер шәхес тип түгел, ә үҙҙәренең шәхси милке тип иҫәпләй. Йәғни улар менән нимә теләйбеҙ, шуны эшләй алабыҙ, тип уйлайҙар. Ҡыҫҡаһы, балаларының яҙмышына ошолай итеп ҡыҫылыуҙары - ата-әсәләрҙең эгоизмы һәм аҡылһыҙлығы ул. Башҡаса нисек атап була һуң? Әлбиттә, һәр кем балаһының бәхетле булыуын теләй. Быға береһе лә ҡаршы түгел. Ләкин хыялдарына, теләктәренә ҡаршы килеп, уларҙы бәхетле итеп буламы икән?

...Үҫемлектең бит орлоғо һабаҡтан өҫкә ҡарай үҫеп китмәй, ә ергә төшөп, айырым бер үҫемлек булып шытып сыға. Шуға уның үҙ һабағы, үҙ сәскәһе, үҙ емеше булаСаҡ. Шулай уҡ баҡсасы, үҫенте тиҙерәк үҫһен, тип, һабағын тегеләйбылай тартҡыламай. Йәки ниндәйҙер бер үҫентенән икенсе бер үҫемлек емешен, мәҫәлән, ҡарағат үҫентеһенән сейә емеше алырға хыялланмай - аҡылһыҙлыҡ икәнен яҡшы белә. Ғөмүмән, үҫентеләрҙең һабағына бөтөнләй теймәй, ә яҡшы уңыш алыу өсөн уларҙың төбөн йомшарта, ашлай, һыу ҡоя...

Балалар ҙа шул үҫентеләр һымаҡ ул. Уларҙың да үҙ тормошо, үҙ хыялы, үҙ маҡсаты бар. Бөтөнләй ата-әсәләренә оҡшамаҫҡа, бигерәк тә тормошҡа булған ҡараштары уларҙыҡы менән тап килмәҫкә мөмкин. Шулай уҡ һәр береһенә был тормошта йәшәү өсөн тәбиғәт тарафынан ниндәйҙер һәләттәр орлоҡ итеп һалынған була. Бына шул һәләттәр тамырланып, һабаҡ ебәреп, сәскә атып, емеш бирергә тейеш. Ә ата-әсәләрҙең бурысы - ошо үҫешкә бөтә шарттар булдырыу. Ҡыҙғаныуға ҡаршы, күптәре балаларына ҡарағанда баҡсалағы үҫемлектәрҙе дөрөҫөрәк тәрбиәләйҙәр шул. Ҡарағаттан сейә яһап булмай икәнен беләләр, ә тәбиғәте менән рәссам булып тыуған бала-

*УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ*

# ЭСЕМ БОШОП ҠУЙҘЫ ӘЛЕ...



**"Киске Өфө" гәзитенең, ғәҙәттәгесә, һәр һанын көтөп алам. Һәр мәҡәләне, һәр һөйләмде ентекләп, күңелгә һеңдереп уҡыйым. Ә был баҫмала гәмде уятырлыҡ, күңелде ҡуҙғытырлыҡ фекерҙәр тулып ята.**

Һәр яҙылыу кампанияһы тамамланғас, "Тиражы артҡандыр инде" тигән өмөт менән гәзитебеҙҙең тиражын да байҡай торған ғәҙәтем бар. Әле лә шулай иттем дә... аптырап ҡалдым: өс мең дүрт йөҙҙән өс мең ике йөҙ иллегә тороп ҡалған. Йөҙ илле кеше алдырмай булып сыҡтымы инде улай булғас?

Эйе, аптырауымдың сиге юҡ. Нишләп шул хәлгә ҡалдыҡ икән? Бынан сығыу юлы ла бар һымаҡ. Әгәр һәр бер гәзитте алдырыусы үҙенең артынан берәүҙе генә эйәртһә, баҫма һаны күпкә артыр ине. Был тәңгәлдә "Үҙең ни эш ҡырҙың һуң?" тип әйтеүселәр табылаСаҡ. Шөкөр, был юлы ла үҙемдән башҡа өс кешене яҙылырға өгөтләнем. Ошо хаҡта бүтәндәр ниндәй фекерҙә икән?

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы Сораман ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан идаралығынан белдереүҙәренсә, 13 августа Урал арьяғында дөйөм майҙаны 1052,1 гектарҙа 10 янғын сығанағы иҫәпләнә. Иң күп ут сығанаҡтары Бөрйән районында теркәлгән. Унда 6 урында урман яна. Шулай уҡ Хәйбулла, Йылайыр, Белорет, Ейәнсура райондарында ла урман янғыны менән көрәш дауам итә. Райондарҙа 1109 янғын һүндереүсе белгес һәм ирекмән эшләй, 154 берәмеккә яҡын техника йәлеп ителгән.

✓Республика Башлығы Радий Хәбиров урман янғындарына бәйле хәл менән яҡындан танышыу өсөн Урал арьяғына юлланды. Хәйбуллала уттан зыян күргән биләмәләрҙе вертолеттан ҡарағандан һуң ул ауыл халҡы һәм ут һүндереүҙә ҡатнашҡан ирекмәндәр менән аралашты. Урындағы халыҡ Радий Хәбировҡа районДың 17 ауылында кәрәҙле телефон насар тотоуы, был үҙ сиратында урман янғындары менән көрәшкән төркөмдәрҙең бер төптән эшмәкәрлек алып барыуына ҡамасаулауы тураһында зарланды. Радий Хәбиров техника менән ярҙам буласағын, шулай уҡ халыҡ һорауы буйынса фельдшер-акушер пункты һәм мобиль бәйләнеш мәсьәләһен хәл итергә вәғәҙәләне.

✓Әбйәлил районында "Цемикс" заводы эшләй башланы. Уны асыу тантанаһында Рәсәй Президенты Владимир Путин һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. Предприятие йылына 240 мең тонна ҡоро төҙөләш ҡатнашмалары сығара ала. Яңы завод халыҡ-ара талаптарға нигеҙләнеп эшләй. Тирә-яҡ мөхиткә зыян килтермәү - төп бурыс. Шулай уҡ унайлы хеҙмәт шарттары булдырыуға ҙур иғтибар бүленә. Бында эш процесы тулыһынса автоматлаштырылған. Предприятие Австрияның "Лассельсбергер" холдингына ҡарай. Башҡортостанда инвестор 10 йылдан ашыу эшләй, Әбйәлилдә асылған завод - икенсеһе.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путиндың "Цемикс" заводы эшселәре менән осрашыуында ауылдарҙы газға тоташтырыу, атап әйткәндә, Әбйәлил районының Дауыт ауылына газ индереү тураһында һорау бирелде. Дәүләт башлығы Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбировтан был проблеманы хәл итеүен һораны. Республика етәксеһе мәсьәләне шәхси контролдә тотасағы тураһында белдерҙе. Президент һүҙҙәренсә, 2022 йыл аҙағына тиклем биләмәләр янынан ғәмәлдәге газ үткәргестәр һуҙылған ауылдар зәңгәр яғыулыҡ менән тәьмин ителә. Йыраҡ ятҡан биләмәләр буйынса эштәр планға ярашлы алып барыласаҡ.

нан иҡтисадсы яһарға тырышалар. Үсемлектәрҙе үҫтерергә тырышыу ниндәй һөҙөмтәләргә килтерһә, баланы үҫтерергә тырышыу ҙа шуға килтерәсәк...

Әйтергә кәрәк, Ислам динендә, Аллаһ Тәғәлә һәр баланы был донъяға үҙ ризығы менән тыуҙыра, ти. Йәғни, һәр кемгә бирелгән тәбиғи һәләттәрҙе "үҙ ризығы" тип атай ул. Тик уларҙың үҫеп китеүенә шарттар ғына тыуҙырырға кәрәк. Шуныһы ҡыҙыҡ: әсәйҙәр ауырлы йөрөгәндә, балаһы сәләмәт тыуһын тип, Аллаһ Тәғәләненең исемен көн һайын иҫкә төшөрә. Унан ярҙам һорайҙар. Ә бына бала тыуғас, ҡайһы берәүҙәре Уны онота ла ҡуя. Аллаһтың биргән "ризығы" менән риза булмай, балаларын үҙҙәренсә үҫтерә башлайҙар. Әлбиттә, ундайҙарҙың киләсәге "тамуҡҡа" әйләнәсәк...

Үҙ һөнәрен тапҡан балалар менән ата-әсәләренең хыялын тормошҡа ашырыусы балаларҙы киләсәктә нимә көтә һуң?

Егерменсе быуатта йәшәгән Американың күренекле психологы Абрахам Маслоу ("Мотивация һәм шәхес") оҙаҡ йылдар үҙ һәләттәренә ярашлы һөнәрҙәрен тапҡан кешеләрҙе өйрәнгән. Ғалим уларға "үҙҙәрен тормошҡа ашырған кешеләр" тип исем биргән (Бәлки, дөрөҫ тәржемә итмәгәнмендер, инглиз теленән рус теленә "самоактуализированные люди" тип "ауҙарылған"). Һәм ул ҡыҙыҡлы асыш яһаған: ундай кешеләр эш барышында ниндәйҙер ғәҙәти булмаған ләззәтләнеү тойғоһон кисерәләр икән. Һуңғы йылдарҙа уның дөрөҫлөгөн башҡа ғалимдар ҙа иҫбатланы. Беҙ хәҙер ул тойғоно "бәхет" тип атайбыҙ...

Ғалимдың асышына нигеҙләнеп, шуны әйтергә теләйем: тәбиғәт кешеләрҙе был донъяға бәхетле булһындар өсөн тыуҙыра, ә киреһенсә түгел. Уға ирешеү өсөн һәр берәһенә ниндәйҙер һәләттәр бүләк иткән. Йәғни кешеләр шул һәләттәренә ярашлы эштәр башҡарһа, ысын мәғәнәһендә үҙҙәрен бәхетле тоясаҡтар.

...Бына шуға үҙ һөнәрҙәрен тапҡан кешеләр эш барышынан ләззәт табалар. Эшкә дәртләнеп баралар, ҡәнәғәтлек табып ҡайталар. Эштәрен яратып һәм сифатлы итеп башҡаралар, һәр ваҡыт әҙләнәләр, бейеклеккә ынтылалар. Белеүебеҙсә, кешеләр йыл әйләнәһенә эшләйҙәр. Шуға улар көн һайын, йыл буйы, хатта ғүмер буйы бәхетле буласаҡтар! Үҙҙәрен физик яҡтан да, рухи яҡтан да сәләмәт тоялар. Һәм тағы бер мөһим әйбер: бәхетлеләр башҡаларға ла тик бәхет кенә теләйәсәктәр...

Ә бына үҙ һәләттәрен тормошҡа ашыра алмағандар ундай бәхеттән мәхрүмдәр. Ғәҙәттә, улар эште ниндәйҙер яза итеп ҡабул итәләр. Эш көнөнөң үткәнен түҙемһеҙлек менән көтәләр, тиҙерәк ял көндәренең етеүен теләйҙәр. Күбеһе эштәрен "минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе", тигәнерәк принцип менән башҡаралар. Шуға хеҙмәт емештәренең сифаты ла түбән була. Күптәре уҡыу йорттарында үҙләштерелгән һөнәрҙәре буйынса эшләмәй. Йыш ҡына эш урындарын алмаштыралар.

Тәбиғи юл менән бәхетте тоймағас, күптәре уны химик юл менән тойорға тырыша башлай. Йәғни уларға спиртлы эсемлектәр, наркотиктар ярҙамға килә. Эштән һуңғы ваҡыттарҙа, ял көндәрендә шулар ярҙамында ләззәтләнеү ғәҙәттәренә инеп китәсәк. Артабан был насар ғәҙәттәр эштә лә, уларҙың ғаиләләрендә лә ниндәйҙер проблемалар тыуҙырыуы мөмкин. Шулай уҡ бәхетлеләрҙән көнләшә башлайҙар, уларға нисек тә булһа ла аяҡ салырға тырышалар. Ҡыҫҡаһы, бәхетһеҙҙәр бәхетһеҙлек сәсә башлай...

...Яҙғандарымдың ошо урынына еткәс: "Яратҡан һөнәрем буйынса эшләр инем дә ул, уның эш хаҡы бик түбән бит әле" ,- тип әйтеүселәр күп булыр. Әлбиттә, балаларға үҙ юлын табырға ярҙам итеү ғаиләләрҙә һәм мәктәптәрҙә генә түгел, ә дәүләт кимәлендә лә ниндәйҙер эштәр башҡарылырға тейеш. Сөнки бөгөнгө көндә ҡайһы бер өлкәгә ҡараған профессияларҙың эш хаҡы саманан тыш юғары, ҡайһы берҙәренеке бик түбән. Шуға күпселек йәштәр яратҡан һөнәрҙәренән баш тартып, эш хаҡы юғары булған профессияларҙы һайларға мәжбүрҙәр. Уларҙы ла аңларға була: хәҙерге ваҡытта бәләкәй эш хаҡы менән үҙаллы тормош башлап китеүе мөмкин дә түгел һымаҡ.

Ә бит бындай айырмалыҡтар илебеҙ экономикаһында ҡайһы бер проблемалар тыуҙыра. Үрҙә, яратҡан һөнәрҙәре буйынса эшләгәндәрҙең хеҙмәт емеше юғары сифатлы булһа, профессияны тик эш хаҡы өсөн генә һайлағандарҙыҡы түбән була, тигәйнем. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, аҙаҡҡыларының һаны йылдан-йыл арта. Был күренеш, үҙ сиратында, иҡтисадҡа кире тәьҫир итә. Сөнки шуға ярашлы илебеҙҙә етештерелгән тауарҙарҙың һәм төҙөләштәрҙең сифаты төшә бара.

Был проблеманы тик дәүләт кимәлендә генә хәл итеп булалыр. Хөкүмәт составындағы етәкселәр түбән эш хаҡы менән юғары эш хаҡының араһын яҡынайтырға тейештәр. Уларҙың араһындағы айырма ҙур булмаһын. Шул ваҡытта йәштәрҙең күбеһе үҙ һөнәре буйынса эшләргә тырышасаҡ. Европаның алдынғы илдәрендәге кеүек була инде. Мәҫәлән, Швейцарияла иң түбән эш хаҡы айына - 3600, ә иң юғарыһы - 5600 евро тирәһе. Айырма артыҡ ҙур түгел. Унда урам һепереүсе айына 3000-дән ашыу эш хаҡы ала! Шуға унда һәр береһе тиерлек үҙенең яратҡан һөнәре буйынса эшләй һәм эшен яратып башҡара. Һөҙөмтәһе бөтәбеҙгә лә билдәле: Европала етештерелгән тауарҙарҙың сифаты беҙҙең илдекенән әллә күпмегә юғары...

Фекерҙәремде йомғаҡлап, шуларҙы әйткем килә: тәрбиә балаларҙың тәбиғәтенә ҡаршы килергә тейеш түгел. Һайлаған һөнәрҙәренә ҡаршы килеп, уларҙы киләсәктә бәхетле итеп булмаясаҡ. Иманым камил, кешелек донъяһындағы яуызлыҡтың күпселеге балаларҙың тәбиғәтенә ҡаршы килеүҙән башлана...

Балаларҙың уй-теләктәре, хыялдары тик изге ниәттәрҙән генә тора ул. Әгәр һәр баланың хыялы тормошҡа ашһа, беләһегеҙме, кешелек йәмғиәте нисек үҙгәрер ине? Һәр ерҙә изгелек, мөхәббәт бөркөлөп торор ине. Илебеҙ сәскә атыр, күпселек ғаиләләр етеш һәм бәхетле йәшәр ине. Бына шуға балаларҙың тәбиғи үҫешенә, үҙҙәренә оҡшаған һөнәрҙәренә эйә булырға һәр өлкәлә лә: ғаиләләрҙә лә, мәктәптәрҙә лә, дәүләт кимәлендә лә ыңғай шарттар булдырылырға тейеш.

**Наил ЮЛДАШБАЕВ,**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**
**Ейәнсура районы.**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ЯР БУЙҘАРЫ...

**Биш көнлөк ялға - Әй йылғаһы буйлап сәфәр сыҡҡан республика парламенты спикеры Константин Толкачев социаль селтәрҙә үҙенең тәьҫораттары менән уртаҡлашып, ялының тәүге көнөндә үк йылға буйлап йөҙгәндә өс йөҙләп катамаран осратыуы, ләкин был туристик маршрутта бәҙрәфтәрҙең булмауы хаҡында аптырап яҙып сыҡты.**

Бындағы ял итеүселәрҙең күплегенә ҡарап та яр буйҙарының ниндәй тиҙәклеккә әйләнеүен күҙ алдына килтереүе ҡыйын түгел, ти спикер. Өҫтәүенә, ял итеүселәр турист усаҡтары өсөн урындағы ағастарҙы ҡырағайҙарса ҡыра, браконьерҙарса ысул менән балыҡ тота, тирә-яҡ тулы сүп-сар. БР Дәүләт Йыйылышы рәйесе хатта был тирәлә атыу тауыштары ла ишеткән: тимәк, һунар итеүселәр ҙә етерлек.

Дөрөҫ, спикерҙың был яҙмаларына комментарийҙарҙа республикалағы "ҡырағай" туризмдың бындай күренештәренең күптән инде яңылыҡ түгеллеге, ниһайәт, уны юғары власть әһелдәренең береһе үҙ күҙҙәре менән күреүе һәм бының ниндәйҙер һөҙөмтәһе булырына ишаралар яһала. Эйе, ҡырағай туризм сәскә ата беҙҙә, айырыуса бөгөнгө көн, сөнки пандемия арҡаһында сит илдәргә юлдар ябыҡ һәм шул арҡала бар ғәләм үҙебеҙҙең Башҡортостан тәбиғәт ҡомартҡылары: йылға-күлдәребеҙ, тау һәм урмандарыбыҙ ҡосағына ташланды. Хәйер, үҙебеҙҙекеләр ҙә, ситтәр ҙә етерлек. Шуныһы ла мөһим: республикабыҙға ситтән туристар йәлеп итеү хәҙер бик актуаль, дәүләт кимәлендәге сәйәсәт. Үкенескә, бөтөн туристик объекттарҙа ла туристар өсөн заманса сервис түгел, исмаһам, элементар шарттар булдырыу бурысы уйланылмаған булып сыҡты. Сәфәр маршруттарында тәбиғәт һәм турист законадарын боҙоуҙарға контроллек итеү, тәртип булдырыу механизмдары ла эшләнмәгән. Ә был мәсьәләләр туризм эшмәкәрлегенең иң беренсе баҫҡысында торорға тейеш түгелме ни?

Закон тигәндән, "Рәсәй Федерацияһында туризм эшмәкәрлеге нигеҙҙәре тураһында"ғы закон ҡабул ителеүгә хәҙер ... сирек быуат үтеп киткән икән дә! Был ваҡыт эсендә туризм эшмәкәрлеге әллә күпме үҙгәрештәргә дусар булды, ә закон йылдар буйы шул килеш ҡалып килде. 2021 йылда РФ хөкүмәтенә туризм хаҡында яңы закон проекты индереләсәк икән. "Туризм өлкәһендә хоҡуҡи-норматив акттарҙың бөтөн системаһы яңыртыласаҡ", - тип хәбәр итә был йәһәттән Ростуризм етәксеһе Зарина Догузова. Йәғни кадрҙар әҙерләүҙән алып туристарға күрһәтеләсәк хеҙмәттәр сифатына контроллек итеү мәсьәләһенә тиклем, тимәк, тип аңларға булалыр быны "кара" аҡыл менән әлеге беҙҙең темаға бәйләп.

Контроль тигәндән, һәр бер ял итеүсе тәркөм йә айырым кеше артынан ҡарауылсы, йыйыштырыусы ҡуйыу мөмкин түгел, әлбиттә. Бөтөн проблема ял итеүселәрҙең әҙәп-тәрбиә-холоҡ-ҡылығы кимәленә бәйле. Ә был кимәл инде беҙҙең Рәсәй граждандарының иң "ауыртҡан" урыны. Сит ил туристарының аң кимәле менән сағыштырырлыҡ түгелдер һәр хәлдә, сөнки сит илдәрҙә экология, ер-һыу, йәшеллек ҡәҙерен беләләр, ә белмәгәндәрҙән ҡайырып штраф түләтәләр. Ҡайһы бер илдәрҙә рөхсәтһеҙ ағас ҡырҡыу түгел, урманға инергә лә, һыу инеү түгел, яр буйында балыҡ ҡармаҡлау ҙа тыйыла. Ә сүп-сар өсөн шулай уҡ - штраф. Кенияла, мәҫәлән, ҡулға пластик моҡсай тотоп йөрөгән өсөн дә штраф түләтелә икән, сөнки хәҙер унда, шулай уҡ Франция, Руанда, Һиндостан,Ямайка, Тайвань, Марокко һәм башҡа илдәрҙә пластик моҡсайҙар, һауыт-һаба, төрөү материалдары етештереү тыйылған.

Туристик маршруттарҙа таҙалыҡ һәм тәртип темаһын дауам итеп, шуны әйтергә кәрәк: республиканың Бөрйән, Белорет, Баймаҡ райондарынан туристарҙан һуң ятып ҡалған сүп-сар, пластик әйберҙәр, бысраҡлыҡ хаҡында күптән саң ҡаға урындағы халыҡ, социаль селтәрҙәрҙә яҙа был турала. Яңыраҡ ҡына ошондай уҡ борсоулы сигналдар Асылыкүл менән Ҡандраҡүлдән дә килеп етте. Ә Талҡаҫтан был хаҡта аныҡ дәлил - фото ла һалғандар интернетҡа: ниндәйҙер бер "аҡыллы баш" күсмә "мискә-мунса"һын күлгә терәтеп үк ултыртып ҡуйған, йыуынты һыу Талҡаҫҡа ағып төшә.

Белмәйем, беҙҙең халыҡҡа тәртип менән әҙәп тигәнде ниндәй генә штрафтар менән дә дөңдереп булмаҫтыр, ахыры. Йылдар буйы килгән ғәҙәт - дөйөм милек һәм байлыҡтарыбыҙға төкөрөп ҡарау психологияһы ҡанға нығ һеңгән, күрәһең...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Президенты пандемия осоронда төбәктәргә бик һирәк сыға. Бындай шарттарҙа Путиндың төпкөл районға килеүе тотош республика өсөн әһәмиәтле. Был эш сәфәре дәүләт башлығының төбәктең үҫешкә алған йүнәлешен хуплауын иҫбатлай, ти иҡтисадсылар. Бынан тыш, сит ил эшҡыуарҙары менән берлектә төҙөлгән заводты асыуҙа ҡатнашыуы инвесторҙар өсөн дә ишара.

✓2020 йыл йомғаҡтары буйынса республика иҡтисадына инвестициялар күләме 365 миллиард һум тәшкил иткән. Был турала Радий Хәбиров Рәсәй Президенты Владимир Путин менән осрашыуҙа белдерҙе. Радий Хәбиров Рәсәй Президентынан студенттар кампусын төҙөү өсөн федераль финанслау бүленгән 5 төбәк исемлегенә инеүҙә һәм карбон полигондары булдырыу буйынса федераль тәжрибә майҙансығы тип иғлан ителгән төбәктәр иҫәбенә әлегеүҙә ярҙам һораны. Владимир Путин, был һораүҙар хәл ителәсәк, тине.

✓Башҡортостанда, 13 августа мәғлүмәттәр буйынса, бер тәүлектә 286 сирле асыҡланған. Республикала бөтәһе 51 730 COVID-19 йоҡтороу осрағы теркәлгән. Уҙған тәүлектә ун кеше коронавирус инфекцияһы ҡорбаны булған. Пандемия башланғандан алып Башҡортостанда 885 кеше ошо мәкерле сирҙән донъя ҡуйған. Тәүлек эсендә 432 пациент дауаханан һауығып сыҡҡан. Һауыҡҡандарҙың дөйөм һаны - 44 317. Дауаханан тыш пневмония менәнә тәүлек эсендә 135 кеше сирләгән.

✓Йылайыр районында республикабыҙ йәштәренең "Асылташ" башҡорт мәҙәни форумы булып үтте. Сара йәштәр араһынан йәш лидер-етәкселәрҙе үҫтереүҙе, башҡорт халҡының мәҙәни-тарихи ҡомартҡыларын өйрәнеүҙе, башҡорт телен үҫтереүҙе, йәштәрҙе берләштереү һәм дуҫлаштырыу юлдарын булдырыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Форум сиктәрендә үткән асыҡ лекторикумда йәштәр үҙҙәре лә спикер ролендә сығыш яһап, алған белемдәре һәм тәжрибәне менән уртаҡлашты. Башҡорт телендә "Асылташ" мәғрифәт конференцияны үткәрелде һәм проекттар конвейеры ҡаралды. Иң унышлы тип танылған проекттар грантҡа тәҡдим ителәсәк.

*✓ Халыҡ нигеҙҙә спиртлы эсемлек һатыуҙы тыйыу идеяһын күтәреп алды. Ысынлап та, "Айыҡ ауыл" исемен йөрөткән ауылдарҙа йәшәгәндәр сәләмәт тормош алып барырға тейеш.*



ҠЫҪҠАСА

# КӨРӘШСЕЛӘР - БАР ДОНЪЯНАН

✓ **Токиолағы Олимпиаданан һуң спорт йәмәғәтселеге һәм спорт һөйөүселәрҙең барлыҡ иғтибары Башҡортостанға йүнәлтелә: ошо көндәрҙә Өфөлә спорт көрәше буйынса юниорҙар чемпионаты башлана.** Шуныһы һөйөнөслө: республикабыҙҙың баш ҡалаһы Рәсәйҙә бындай ярыштарҙы ҡабул итеүсе тәүге ҡала булды. Ил Президенты Владимир Путин республикаға килгәнендә Башҡортостандың бындай халыҡ-ара турнирҙарҙы юғары кимәлдә үткәрә белеүе ошонон кеүек, шулай уҡ башҡа спорт ярыштарын үткәреүгә дәғүә итә алыуы хаҡында белдерҙе. Әлеге ҙур спорт ярышы Өфөлә 54 илдән 1500 ҡатнашыусыны туплай. Донъя беренселеге 13 августа грепплинг буйынса көрәш менән башланды, ә 16 августа грек-рим һәм иректә көрәш менән дауам итеп, 22 августа тиклем барасаҡ. Чемпионат 17 августа "Өфө-Арена" майҙанында тантаналы асыласаҡ. Был ярыштарҙа 2024 йылда Парижда үтәсәк Олимпия уйындарында ҡатнашасаҡ спортсылар сығыш яһай.

✓ **Башҡортостанда көндәр оҙайлы ваҡыт эҫе һәм ҡоро тороуы сәбәпле, йылғаларҙа һыу запасы кәмей башланы.** Республиканың Экология министрлығы мәғлүмәте буйынса Ағиҙел йылғаһы бассейнының һыуы июндә уртаса күләмдән 30-35 процентҡа түбән булған. Ағиҙел һәм Өфө йылғалары норманан 40-150 см-ға кәмерәк. Баш ҡала янында Ағиҙел йылғаһы күләме гидропост нуленән 149 сантиметрға кәмерәк тәшкил итә.2010 йылдың октябрендәге тарихи минимумға 14 сантиметр ҡала. Павлов һәм Түбәнге Кама һыу һаҡлағыстарына май-июндә килгән һыу норманан күпкә кәм. Был күренеш июлдә һәм өсөнсө кварталда ла дауам итә. 2010 һәм 2012 йылғы ҡоролоктан һуң Башҡортостан Хөкүмәте һыуҙы күп файҙаланған предприятиеларға үҙҙәренең һыу алыу ҡоролмаларын яңыртырға, үҙгәртеп ҡорорға тәҡдим итте. Ун йыл эсендә байтаҡ эшләнде һәм бөгөн ҡоролоҡ булған хәлдә лә Өфө һәм республиканың башҡа ҡалалары халҡын һыу менән тәьмин итеү буйынса хәүеф юҡ.

✓ **Был көндәрҙә Өфөлә мәғариф буйынса традицион август кәңәшмәһе булып үтте.** Быйыл был педагогия форумы "Мәғлүмәт заманында балаларҙы һәм йәштәрҙе тәрбиәләү һәм социаллаштырыу" тигән төп темаға бағышланды. Республика Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, форум сиктәрендә 12 дискуссия майҙансығы эшләне һәм унда мәктәпкәсә белем биреү ойошмаларында тәрбиә, белем биреүҙең цифрлаштырылған шарттарға күсеүе менән бәйле тәрбиә һәм социаллаштырыу (һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән уҡыусыларҙы ла иҫәпкә алып), дөйөм белем биреүҙә яңыртылған Федераль белем биреү стандарттарын индереү, урта һөнәри белем биреү системаһында тәрбиә, һөнәри йүнәлеш биреү һәм башҡа күп мәсьәләләр ҡаралды. Дискуссия майҙансыҡтары кәңәшмәләрендә уҡытыусылар ғына түгел, ойошмалар етәкселәре, белгестәре, муниципаль методик хеҙмәттәр етәкселәре һәм методистары, белем биреү учреждениелары директорҙары, уларҙың урынбаҫарҙары һәм уҡытыусылар ҡатнашты. 13 август "Торатау" конгресс-холында үткән пленар ултырыш педсоветтың йомғаҡлау сараһы булды.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# АЙЫҠ АУЫЛ АЙЫҠ БУЛҺЫН!




**Башҡортостан йәмәғәтселеге "Айыҡ ауыл" республика конкурсында еңгән тораҡ пункттарҙа алкоголь һатыуҙы сикләү мөмкинлеге тураһында фекер алыша.**

Йыл һайын еңеүселәргә ауылды төҙөкләндереүгә 2 миллиондан 5 миллионға тиклем һумлыҡ сертификат тапшырыла. Уға урындағы хакимиәт тә үҙ өлөшөн индерә. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, "айыҡ" тип танылған ауылдарҙа спиртлы эсемлек, шул иҫәптән "суррогат"һатыу, эсеү дауам итә. Бындай күренештәр булырға тейеш түгел. Улар үҙенең исеменә тап төшөрмәҫкә, ысын мәғәнәһендә, айыҡ булырға тейеш.Был проблеманы закон кимәлендә хәл итергә мөмкин, тип иҫәпләй РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байгусҡаров. Башҡортостанда халыҡ ҡарары буйынса аныҡ бер ауылда алкоголле эсемлек һатыуҙы тыйырға булышлыҡ иткән закон ҡабул ителгән. Әммә республиканың бер ауылында ла, шул иҫәптән "айыҡ" тип танылғандарында ла уны ҡулланыусы юҡ. Һатыуҙы сикләү мәсьәләһе буйынса 2019 һәм 2020 йылдарҙа конкурстарҙа еңгән ауылдар халҡы фекер алыша. Атап әйткәндә, Ейәнсура районы Башҡорт Өргөнө, Хәйбулла районы Әбүбәкер, Әбйәлил районы Таштимер, Күгәрсен районы Исем, Бөрйән районы Брәтәк, Көйөргәҙе районы Яҡут ауылдарында ошо темаға арналған сходтар үтте. Халыҡ нигеҙҙә спиртлы эсемлек һатыуҙы тыйыу идеяһын күтәреп алды. Ысынлап та, "Айыҡ ауыл" исемен йөрөткән ауылдарҙа йәшәгәндәр сәләмәт тормош алып барырға тейеш. Ауылдарға ингән урындарҙа спиртлы эсемлек эсеү һәм һатыуҙың тыйылғанлығы хаҡында һөйләгән баннерҙар ҡуйылыуы ла мөһим. Ул ауылдың паспорты, таныҡлығы ролен үтәйәсәк.

# СПОРТ МЕНӘН ШӨҒӨЛЛӘН ДӘ...



**1 августан Рәсәйҙә спорт менән шөғөлләнгән өсөн һалым айырмаһын ҡайтарырып алыу мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Был хаҡта БР Йәмәғәт палатаһының мәғариф, мәҙәниәт, спорт, йәштәр сәйәсәте, хәйриәлекте, ирекмәнлекте үҫтереү буйынса комиссия ағзаһы Святослав Дрейман аңлатма бирҙе.**

"Бөгөн республикала 180 мендән ашыу кеше фитнес-клубтарҙа шөғөлләнә. 2022 йылда Башҡортостан халҡының 5 процент тирәһе спортҡа түләгән аҡсаһын өлөшләтә ҡайтара ала. Түләгән аҡсаһынан һалым айырмаһын алырға теләгәндәр легаль клубҡа барасаҡ һәм килешеү төҙөйәсәк. Шулай итеп, эшҡыуарҙар клиенттарын юғалтмаҫ өсөн үҙенең бизнесын теркәй һәм килеменән һалым түләй башлаясаҡ. Был шулай уҡ даими физик культура менән шөғөлләнергә теләгәндәр һанын арттырасаҡ. 2030 йылға спорт менән шөғөлләнеүселәр һанын 70 процентҡа еткереү өсөн инструменттар кәрәк һәм шуның береһе - спорт һалымы айырмаһын түләүе. Беҙҙең ил цифрлаштырыу буйынса донъяла алдынғы урынды биләй һәм яҡын киләсәктә кешеләр дәүләт хеҙмәте порталы аша һалым айырмаһы түләүен һәм абонемент һатып ала аласаҡ, тип ышанам. Тормош сифатын күтәреү өсөн килемдә арттырырға ғына түгел, ә сығымды ла кәметергә кәрәк. Бөгөн был хаҡта күберәк кеше белеүе һәм уның менән файҙалана башлауы мөһим", - ти ул.

Спорт һалымы айырмаһы сығым күләменән сығып билдәләнә, әммә йылына 120 мең һумдан ашыу булырға тейеш түгел. Уны үҙенә генә түгел, ә балаларға ла алырға мөмкин. Һалым айырмаһы 2022 йылдың 1 ғинуарынан алған килемгә генә ҡулланыласаҡ һәм уны рәсми эш хаҡы алғандар ғына ала. Мәҫәлән, 10 меңгә абонемент алһағыҙ, 1,3 мең һумын кире ҡайтарырға мөмкин.

# БЕРЕНСЕ СЕНТЯБРҘӘ...



**Башҡортостанда 1 сентябрҙә 498 441 уҡыусы парта артына ултырасаҡ, шуның 60 239-ы 1-се класҡа бара. Белем биреү учреждениеларын яңы уҡыу йылына әҙерләү тураһында республика Башлығы Радий Хәбиров һөйләне.**

"Йәй тамамланыуға бер ай ҡалды. Беҙҙең бурыс - мәктәптәрҙе йылы ваҡытта әҙерләп ҡалыу. 2021 йылда был мәсьәләгә комплекслы ҡараныҡ һәм 27 уҡыу йортон капиталь ремонтланыҡ. Ҡыйыҡ, тәҙрә, иҙәндәрҙе алмаштырҙыҡ, стеналарҙы йылыттыҡ. Балаҡатай, Үргә Ҡыйғыла, Учалы районының Ахун ауылында, Бөрйән районының Иҫке Монасип һәм башҡа ауылдарҙа балалар яңыртылған кластарҙа уҡыясаҡ. Коронавирус ҡамасауламаһа, алдағы йылда тағы ла күберәк эштәргә планлаштырабыҙ", - тип яҙҙы ул социаль селтәрҙәге үҙенең сәхифәһендә.

Республика етәксеһе 2020 йылдың 1 сентябренән башланғыс класс уҡыусыларының мәктәптә бушлай туҡланыуы хаҡында иҫкә төшөрҙе. "Федераль бюджет иҫәбенә бушлай ғына өсөн билдәле талаптар бар. Беҙҙең аҙыҡ-түлек блоктарының ҡайһы берҙәре бындай көсөргәнешкә әҙер түгел, шуға күрә 280 ашханаһың ҡоралмаларын алмаштырҙыҡ", - ти Радий Хәбиров. Ул шулай уҡ иғтибарҙы мәктәп тәрбиәһенең мөһим бер йүнәлеше - спорт өлкәһенә йүнәлтте. Уның әйтеүенсә, быйыл Әбйәлил, Әлшәй, Көйөргәҙе, Өфө һәм башҡа райондарҙа 48 ауыл спорт залы ремонтланған һәм яңы йыһаз алынған. "Үткән ике йыл коронавирусҡа бәйле беҙҙең уҡыусылар һәм уҡытыусылар өсөн ҡатмарлы булды. Быйылғы эпидемиологик хәл мәктәп тормошон тулыһынса тойорға булышлыҡ итер тип өмөтләнәм. Бөтәгеҙҙә каникулдың ҡалған көндәрен яҡшы итеп үткәреүегеҙҙе һәм 1 сентябрҙән ҙур теләк менән уҡырға һәм уҡытырға килеүегеҙҙе теләйем",- тип йомғаҡлаған ул посын.

# ГАЗ КИЛЕП ЕТӘМЕ?



**"Берҙәм Рәсәй " һәм төбәк башлыҡтары участкаларҙы газға бушлай тоташтырыу тураһындағы законды бойомға ашырыуҙы берлектә хәл итәсәк.**

БР буйынса "Берҙәм Рәсәй"ҙең йәмәғәт ҡабул итеү етәксеһе, Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы вице-спикеры Эльвира Айытҡолова билдәләүенсә, республиканың ауыл биләмәләре өсөн газ үткәреү ифрат көнүҙәк мәсьәлә. "Депутат булараҡ, миңә был мәсьәлә менән йыш мөрәжәғәт итәләр. Минең округка ҡараған Учалы районында, мәҫәлән, газ үткәреүҙе талап иткән бик күп тораҡ пункттар бар. Тәьмин итеүсе ойошма тарафынан әле башҡарыласаҡ эште бик дөрөҫ ҡарар тип иҫәпләйем. Ун йыллап элек мин был мәсьәләне "Газпром" акционерҙар йәмғиәтенең идара рәйесе Алексей Миллерҙың матбуғат конференцияһында күтәргәйнем. Мине ни өсөн "Газпром"дың селтәр төҙөләшө эшен үҙ өҫтөнә алмауы борсой ине, ә был бит ҡәҙимге тәжрибә. Ҡулланыусы тотонолған ресурс өсөн генә түләй. Рәсәй газ табыу буйынса донъяла иң беренсе, тип күпме генә ҡабатлама, әгәр үҙебеҙҙең тораҡ пункттар әле булһа "зәңгәр яғыулыҡ"ҡа тоташтырылмаған икән, был дөрөҫ түгел",- ти Эльвира Айытҡолова.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡаланың Зәки Вәлиди урамы киҫелеше менән Дуҫлыҡ монументы араһындағы участкала археологтар тикшереү ойошторҙо. Ҡаҙыу эштәре барышында ирекмәндәр урта быуаттарҙа ҡулланылған әйберҙәр тапты. "Өфө ҡаласығы" эргәһендәге майҙанда биҙәүестәр, керамик һауыт-һаба ярсыҡтары һәм көндәлек кәрәк-яраҡтар күп булыуы асыҡланды. Тикшеренеү объекты 500 квадрат метрға тиклем һуҙыласаҡ, тип күҙаллана. Табылған артефакттарҙың теүәл макеты шунда уҡ ҡағыҙ битендә һүрәтләнә. Тикшереү тамамланғас, һүрәттәр электрон форматҡа күсереләсәк. Тарихи ҡомартҡылар тикшереү үткәс, һаҡлауға Башҡортостан милли музейына оҙатылысаҡ.

✓Черниковкала билдәле яҡташыбыҙ, рок-музыкант Земфираның бала һәм йәшлек йылдары үткән йорттоң тышҡы яғында һүрәт барлыҡҡа килде. Гитара, аҡ сәскәләр һәм йырсының портреты. Хрущев заманында төҙөлгән йорттоң тышҡы яғында яҙыуҙар ҙа бар - миллиондарса кеше күңелен яулап, хитка әйләнгән композицияларҙан өҙөктәр килтерелә. Ҡылһыҙ гитара эсендә иһә артистың йөҙөн күрергә мөмкин. Рәссамдар граффитиға ҙур идея һалған. Рәссам Олег Кайбышев бер төркөм коллегалары менән граффити аша йырсының исемен мәңгеләштерергә теләгән.

✓ Августан уҡыусыларға бер тапҡыр бирелә торған 10 мең һумды түләй башланылар. Түләүҙе 6 йәштән (1 сентябргә тиклем тулған осраҡта) 18 йәшкә тиклемге (3 июлдән һуң тулһа) балалары булған ғаиләләр алырға хоҡуҡлы. Атаәсәнән тыш, аҡса уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алыусыларға, опекундарға һәм попечителдәргә бирелә. Мәктәп программаһына ярашлы уҡыуҙарын дауам иткән инвалидтарға һәм һаулығы буйынса сикләүҙәре булғандарға (18 йәштән 23 йәшкәсә) ла аҡса түләнергә тейеш.

✓Яҡын-тирәләге йорттарҙа йәшәүселәрҙең бихисап мөрәжәғәтенән һуң Спорт һарайы алдындағы ойошторолмаған транспорт туҡталҡаһы ябылды. Әле йәйәүлеләр, велосипедсылар, коляскалы атай-әсәйҙәр үтеп йөрөй алһын өсөн майҙанға ҡуйылған ваҡытлыса ҡамауҙар алына. Бында ауыл хужалығы йәрминкәләрен үткәреү дауам итәсәк. Баш ҡала хакимиәте майҙанды төҙөкләндереү буйынса ҡала халҡының фекерен cityadm@ufacity.info электрон почтаһына йыйа, һуңынан иң яҡшы тәҡдимдәр тауыш биреүгә сығарыласаҡ.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ "Өфөнөң 450 йыллығына ҡарата саралар барышында бындай продукцияға һорау артыр тип ышанам. Ретро-трамвайҙар баш ҡалабыҙҙың биҙәгенә әүерелер һәм туризмды үҫтереүгә булышлыҡ итер", - тип белдерҙе Андрей Назаров.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

# РЕТРО ТРАМВАЙҘАР...

**Башҡортостан Өфөнөң 450 йыллығына ретро-трамвайҙар һатып алырға ниәтләй, тип хәбәр иттеләр республика хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтенән.**



Тарихи трамвайҙар республикаға 2023 йылда килтереләр тип көтөлә. Башҡортостан Премьер-министры Андрей Назаров һәм "Уралтрансмаш" директоры Дмитрий Семирозов ошо турала һөйләшеп килеште. Өфөгә тарихи трамвайҙар һатып алыу шарттары ҡаралды. Андрей Назаров әйтеүенсә, Башҡортостан делегацияһы "Уралтрансмаш" продукцияһы менән Екатеринбургта "Иннопром" сәнәғәт күргәҙмәһе барышында танышҡан. Күргәҙмә экспозициялары араһында ретро-трамвай ҙа күрһәтелгән. "Өфөнөң 450 йыллығына ҡарата саралар барышында бындай продукцияға һорау артыр тип ышанам. Ретро-трамвайҙар баш ҡалабыҙҙың биҙәгенә әүерелер һәм туризмды үҫтереүгә булышлыҡ итер", - тип белдерҙе Башҡортостан премьер-министры. Ретро-трамвайҙар Өфөнөң көньяғында, тарихи объекттарға яҡын маршруттарҙа йөрөр тип планлаштырыла.

# ЯУАПЛЫЛЫҠ ТОЙҺОНДАР



**Өфөлә "Башҡортостан ихаталары" программаһы сиктәрендә торлаҡ йорт алдарын төҙөкләндереү эштәре дауам итә.**

Мәҫәлән, баш ҡалабыҙҙың Киров районы Софья Перовская урамының 13-сө йорто янында хоккей майҙаны, балалар һәм спорт майҙансыҡтары барлыҡҡа килде. Бынан тыш, яҡтыртыу бағаналары ҡоролдо, юл ситтәре тәртипкә килтерелде, сүп һауыттары, эскәмйәләр урынлаштырылды, машина ҡуйыу урындары бүлендe, төп юлға һәм тротуарҙарға икенсе ҡатҡа асфальт түшәлде. Сүп-сар контейнерҙары өсөн майҙансыҡ тәртипкә килтерелде. Әле балалар өсөн уйын майҙансығы ҡороу эштәре бара. Степан Кувыкин урамындағы 21-се һәм 23-сө йорттар алдарында ла эш ҡайнай: бордюрҙар һалына, машина ҡуйыу майҙаны киңәйтелә, яҡтыртҡыстарға яңы тауҙар ҡуйыла. Ихаталарҙы төҙөкләндереү эштәре ҡәтғи контролдә тотола. Яныраҡ был ихаталарҙы район башлыҡтары һәм депутаттар ҡатнашлығындағы комиссия тикшерҙе.

"Башҡортостан ихаталары" программаһы 2019 йылда ҡабул ителгәйне, ул нигеҙҙә республика ҡаҙнаһы (94 процент) иҫәбенә башҡарыла, 5 процент самаһын муниципалитет түләнә, 1 проценты (мотлаҡ) торлаҡ йорт милекселәре иҫәбенә эшләнә. Биләмәләрҙе төҙөкләндереү буйынса төрлө фекерҙәр булды. Ни өсөн йорттарҙа йәшәүселәр ҙә түләргә тейеш? Был йәһәттән Дәүләт Думаһының торлаҡ сәйәсәте комитеты рәйесе урынбаҫары Павел Качкаев, биләмәнең йортта йәшәүселәр өсөн эшләнеүе һәм шуға күрә был эштә уларҙың да ҡатнашлығы һәм үҙ ихаталары төҙөклөгө өсөн яуаплылыҡ тойоуҙары кәрәк, тигәйне. "Кала мөхите" проекты сиктәрендә яҙ һайын төҙөкләндерелгән ихаталар торошона мониторинг үткәрелә. Ҡыҙғанысҡа күрә, күп кенә ихаталарҙағы был майҙансыҡтарҙа нимәләрҙер ремонтларға, ҡайтанан төҙәтергә, яңынан буяп сығырға тура килә. Яныраҡ шундай ҡыҙыҡлы тәкдим булды: төҙөкләндерелгән ихаталарҙы йорттарҙа йәшәүселәрҙең үҙ ҡарамағына тапшырыу. Ошо йәһәттән ихаталарҙы кадастр иҫәбенә алып, йорттарҙа йәшәүсе халыҡ милкенә тапшырыу мәсьәләһе ҡарала, тине парламентарий.

# КҮЛ ТАҘАМЫ?



**Республиканың баш ҡалаһында йәшәүселәр Өфө һыу ятҡылыҡтарында һыу инеп, пляждарҙа булып ҡайтҡандан һуң тән сабыртыу һәм ҡысытыуға зарлана.**

Социаль селтәрҙәрҙә хәбәр итеүҙәренсә, йылға һәм күлдәрҙә һыу ингән балаларҙың да тәндәре сабырта. Инорста йәшәүселәр, мәҫәлән, Йылы (Теплое) күлендә булғандан һуң шундай хәл тураһында хәбәр итәләр. "Башинформ" агентлығы бындай хәлгә аңлатма биреүҙе һорап, республика Роспотребнадзорына мөрәжәғәт итте. Был ведомствола белдереүҙәренсә, улар һәм Гигиена һәм эпидемиология үҙәге Йылы күленең сифатына ҡарата дәғүәләр алмаған, шулай уҡ күл һыуына тикшереү үткәреү хаҡында ла мөрәжәғәттәр булмаған. "Пляж асылыу ваҡытына ҡарата Гигиена һәм эпидемиология үҙәге тарафынан үткәрелгән эксперт һығымталары буйынса бындағы һыу һәм ҡом составы санитар нормаларға ярашлы булыуы билдәләнгән", - тип хәбәр итә Роспотребнадзор. Был хаҡта мөрәжәғәттәр алыныу менән Йылы күле һыуына тикшереү үткәреләсәк, тип әйтелә ведомствоның яуабында.

# ТАШЛАНДЫҠ БАҠСАЛАР



**Ташландыҡ баҡса участкалары - коммерцияла булмаған баҡсасылыҡ ширҡәттәре өсөн икенсе һанлы ҙур проблема. Ә беренсеһе - баҡсаларға электр уты үткәреү, тип хәбәр итә Башҡортостан буйынса Баҡсасылар берләшмәһе рәйесе Ринат Миһранов.**

РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров ташландыҡ баҡса участкалары проблемаһын хәл итеү юлдары хаҡында шундай аңлатма бирҙе: "Әгәр ерҙәргә межалау үткәрелеп, улар баҡсасыларҙың коммерцияла булмаған ширҡәттәре (СНТ) иҫәбенә яҙҙырылған икән, ул саҡта ширҡәт бындай участкаларҙы хужаһыҙ тип таныу һәм уларҙы СНТ милкенә күсереү юлауы менән судҡа мөрәжәғәт итә ала. Әгәр ер СНТ иҫәбенә яҙҙырылмаған булһа, уны хужаһыҙ тип таныу мәсьәләһе менән суд муниципалитет йә булмаһа БР Ер һәм милек мөнәсәбәттәре министрлығына мөрәжәғәт итә. Ширҡәт рәйестәре йыш ҡына, ерҙе хосуси милекҡә күсергән баҡсасыларҙан ағзалыҡ иғанәһе түләтеләмә, тигән һорау бирә. Түләргә тейештәр, әгәр ҙә баш тарталар икән, иғанә түләтеү өсөн судҡа мөрәжәғәт итергә була, сөнки СНТ фәҡәт ағзалыҡ иғанәләре иҫәбенә эшләй", - тине депутат.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺУНАРҒА СИКЛӘҮҘӘР ҺӘМ БАШҠАЛАР

● Һунар һәм йәнлектәр донъяһы хаҡындағы законға үҙгәрештәр индерелде: был ике законды ҡулланыу тәжрибәһендәге ҡапма-ҡаршылыҡтар бөтөрөлдө. Асыҡлап әйткәндә, һунарға сикләүҙәр булдырыу тәртибе билдәләнде. Рәсәй Тәбиғәт министрлығы менән килешкәндән һуң төбәк башлыҡтары рөхсәт ителгән һунар төрҙәрен, һунар осорон, һунарҙа ҡулланылыусы рөхсәт ителгән ҡорал төрҙәрен һәм башҡа сикләүҙәрҙе билдәләй. Өс йылдан да кәм булмаған ваҡыт эсендә теге йәки был йәнлек төрө иҫәбе туҡтауһыҙ кәмей барып, дөйөм һаны 50 процент тәшкил иткән хәлдә, һунар тыйыла. Шулай уҡ хайуандар донъяһына дәүләт кадастры тураһында положение ғәмәлгә индерелә.

● Мәҙәниәт ойошмалары өсөн килемгә һалым түләү ваҡыты кисектерелә. Бында китапханаалар, архивтар, музейҙар һәм башҡа мәҙәни объекттар тураһында һүҙ бара. Түләүҙәр 2020 һәм 2021 йылдарҙың һалым осоронда 2022 йылдың 28 мартынан да һуңлатмай башҡарылырға тейеш. Был ойошмалар шулай уҡ 2020-2021 йылдарға килемдән һалым буйынса аванс түләүҙәрҙән азат ителә.

● РФ һалым түләүсеһе булып тормаған физик берәмектәр дәүләт ҡиммәтле ҡағыҙҙарынан, РФ субъекттары һәм муниципалитет ҡиммәтле ҡағыҙҙарынан алынған килемгә һалым түләмәйәсәк. Төбәктәр хәҙер интеллектуаль милектән килемгә һалымға түбәнерәк ставка билдәләргә хоҡуҡлы.

● Автомобиль хужалары ОСАГО килешеүен башҡарған ваҡытта транспорт сараһының техосмотр үтеүе тураһында документ күрһәтеү бурысынан азат ителә, тип хәбәр итте Дәүләт Думаһы депутаты Рәмзил Ишсарин.

● Рәсәй территорияһындағы граждандлығы булмаған кешеләргә 10 йылға ваҡытлыса шәхес таныҡлығы биреләсәк. Документты ҡулына алғандан һуң ул 7 эш көнө эсендә йәшәгән урыны буйынса иҫәпкә торорға бурыслы. Сит ил граждандлығы булғанда йәки сит илдә йәшәргә ниәтләнгән осраҡта был кешеләге документ ғәмәлдән сығарыла һәм ул 15 көн эсендә РФ территорияһынан сығып китергә тейеш була. Шул уҡ ваҡытта ялған мәғлүмәттәр һәм документтар биргән осраҡта ла был кешенән шәхес таныҡлығы тартып алына йәки бөтөнләй бирелмәй.

● Биналарҙың тышҡы стенаһында һәм ҡыйыҡ баштарында урынлаштырылған тауыш техникаһы ҡорамалдары ҡулланып, тауышлы рекламалар биреү тыйыла. Был граждандарҙың тыныслығын шау-шыулы рекламаларҙан һаҡлау маҡсатында эшләнә.

● Юридик шәхес һәм эшҡыуарҙы дәүләт теркәүе хаҡында ғаризалағы ҡултамғаның дөрөҫлөгән раҫлаусы нотариус хәҙер теркәүсе органға шундай уҡ ғариза һәм башҡа кәрәкле документтарҙы ебәрергә бурыслы. Быны бер нотариаль ғәмәл сиктәрендә ҡултамғаның дөрөҫлөгө раҫланған көндә үк электрон формала башҡарырға кәрәк буласаҡ. Башҡа осраҡтарҙа теркәүсе органға документтар ғариза яҙыусы һорауы буйынса ебәрелә.

● Сит ил вәкилдәренә виза биреү ябайлаштырыла. Бынын өсөн Рәсәйҙә классификацияланған ҡунаҡханаларҙың берҙәм исемлегенән бронь буйынса торлаҡ яллау йәки махсус берҙәм реестрҙа торған туроператорҙан саҡырыу ҡағыҙы кәрәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ашҡаҙан

❖ Ашҡаҙандың юғары әселеген түбәнәйтеү өсөн кесерткән һәм алма ҡабығын ҡулланырға була. 100-әр грамм кесерткән баштарын һәм алма ҡабыҡтарын алып, өҫтөнә 1 литр һыу ҡойоп, ҡараңғы урында 20 көн төнәтергә. Ваҡыты-ваҡыты менән болғатып торорға. Һөҙөргә. Төнәтмәне 10 көн дауамында ашағандан һуң яртышар стакан эсергә.

❖ Ашҡаҙан һутының юғары әселеге менән ыҙалаған кешеләргә шулай уҡ онтаҡланған ҡыҙыл көртмәле япрағы ла ярҙам итә. Быны өсөн киптерелгән япраҡты ҡәһүә тартҡыс ярҙамында ваҡларға. Ярты балғалаҡ онтаҡты көнөнә өс тапҡыр ашарҙан алда ҡабып, артынан һыу эсеп ҡуйырға.

❖ Ашҡаҙан ауыртҡанда 2 ҡалаҡ мүк еләгенә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 минут талғын утта ҡайнатырға, һыуытырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр 1/4 стаканлап эсергә.

## Һалҡын тейһә

❖ 10 грамм йүкә сәскәһен (3 ҡалаҡ) эмалле һауытҡа һалып, 200 мл ҡайнар һыу ҡойорға һәм ҡапҡасын ябып, ҡайнар һыу боҫона 15 минутҡа ҡуйырға. Шунан һыуытып, һөҙөргә. Төнәтмәгә ҡайнар һыу өҫтәп миҡдарын 200 мл-ға еткерергә һәм 1 ҡалаҡ бал һалып иҙергә. Көнөнә 2-3 тапҡыр йылы көйөнсә яртышар стакан эсергә.

## Бал ҡорто саҡһа

❖ Иң ябай һәм ҡул аҫтындағы сара - ул юл япрағы. Уның һуты һыҙлауҙы баҫа, ағыуҙы һурып ала һәм шеште ҡайтара. Яңы иҙелгән япраҡтарҙы бал ҡорто тешләгән урынға һалырға кәрәк һәм күп тә тормай һыҙланыу онотола.

## Гастрит

❖ Ашҡаҙандың юғары әселегенә бәйле гастрит булғанда 20 грамм бөтнөк япрағы, 10 грамм эт муйылы (крушина) ҡайыры, 20 грамм һары мәтрүшкә, 30 грамм күгүлән (спорыш), 20 грамм меңъяпраҡ, 30 грамм юл япрағы, 40 грамм ҡылыс үлән (аир) тамыры, 20 грамм эткәлаҡ (окопник лекарственный) тамырын алырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 40 минут алда яртышар стакан эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Тирә-яҡ мөхиттең торошо хаҡында дөрөҫ мәғлүмәткә эйә булыу һәр граждандың хоҡуғы. Әммә былдай мәғлүмәттәргә, ғәҙәттә, бик әҙ һандағы ведомство һәм ойошмалар ғына эйә була һәм мәғлүмәттәр йәшереп тотола.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Хужалыҡта кәрәк булғанда башҡа төр ағастарҙы ла ҡулланғандар. Ҡорос ағас, муйыл, талдан көйәнтә, дуға, арба йәки санаға күреп үрер булғандар. Үрелгән әйберҙәргә һәм кәрзиндәргә, ғәҙәттә, ҡара тал киткән. Һөҙгөс ҡалаҡтар һәм ҡалаҡтар һаҡланған кәрзиндәрҙе муйыл һәм баландан үргәндәр. Шулай уҡ баландан туҡыусылыҡта кәрәкле ҡылыстар эшләгәндәр. Элек муйылдан ябай яндар яһағандар. XIX быуатта муйылдан үрелгән мебель киң таралған.

Артыш бик һирәк осрай торған материал булған. Был ағасҡа оҡшаш ҡыуаҡ эфир майҙары һәм ыҫмала еҫтәре аңҡытып торғанғамы, уның һаҡлау көстәре бар тип ышанғандар. Насар көстәрҙән һаҡланыу маҡсатында ҡайһы саҡта эйәр ҡашын, йәки ҡул таяғының башын артыштан эшләгәндәр.

Башҡорттарҙа ағас эшкәртеүҙе тасуирлағанда авторҙар эш ҡоралдарының ябай ғына булыуы тураһында яҙа. Сөнки оҫта ҡуллы кеше балта һәм бысаҡ ярҙамында ғына ла теләһә ниндәй нәмәне һырып эшләп ҡуя белгән. "Оҫтаның ҡулы башҡа" йәки "балта һабы беләктән" тигәндәр былдай кешеләр хаҡында халыҡта. "Оҫтаһына күрә ҡоралы", "Ҡораллының ҡулы уйнай" тигән мәҡәлдәр ҙә булған. Ағас оҫталарының махсус эш ҡоралдары күп төрлө булған. Ҡайһы бер көнкүреш һәм хужалыҡ әйберҙәрен эшләү ысулы тураһында М.Г. Муллағоловтың "Башҡорттарҙа урман кәсептәре" тигән китабында осратырға була. Китаптың тәгәрмәс эшләү оҫталығына арналған бүлегендә, мәҫәлән, көпсәкте ҡырып шымартыу өсөн генә лә 5-6 төрлө ҡырҡҡыс кәрәк булыуы яҙыла. Йыш ҡына оҫта үҙе эшләп алған ҡырыу станогы ярҙамында эшләгән. Санкт-Петербург ҡалаһындағы Рәсәй этнография музейында солоҡ һәм төрлө һауыт-һаба эшләү өсөн кәрәкле барлыҡ ҡоралдар йыйылмаһы бар: бағау, түңәрәк йышҡы, ҡасау, ҡырҡҡыс бысаҡ төрҙәре.

Урман әҙерләгәндә ағас йығыу өсөн ҡулланылған ябай балталарҙан һәм һарпаҡ балталарҙан тыш, ағастың ҡайырын һыҙырыу йәки үҙағасын тартып сығарыу өсөн төрлө арҡыры балталар (уймыр ҙа тиҙәр) булған. Улар йөҙөнөң ҡабырғаһы һәм киңлеге, һабының оҙонлоғо менән айырылған. Араһында тәпкене хәтерләткән тура балталар булған (кәйлә, аталғы). Солоҡ, ҙур тәпән, улаҡ, ҡайыҡ, ялғаштар эшләгән оҫталар бағау ҡулланған. Кәкре балта, сапҡы ла ошо рәткә ингән, ҡайһы саҡта уларҙың аҫҡы яғы ғына түгел, түңәрәкләнеп торған ике ҡырының береһе лә үткерләнгән булған. Ҡасауҙарҙың төрҙәре лә күп булған. Ҙур ҡасауҙарҙы оҙон итеп һаплағандар. Үҙағасты әҙерләгәндә ҡасауҙың һабына ағас сүкеш менән һуғып, уны вертикаль итеп тиерлек тотоп эшләгәндәр. Ҡасауҙар ҙа яҫылығы һәм формаһы буйынса айырылғандар. Берәүҙәренең ҡырҙары төҙ булған (бөрөз, ҡасау), икенселәре аҫҡа ҡарай көрәккә оҡшап яҫырған, өсөнсөләре олон формаһына яраҡлашып түңәрәкләнеп киткән (аталғы, бәлйә).

Махсус эш ҡоралдарының ҙур өлөшөн юнғы һәм йышҡылар алып торған. Улар араһында бер йәки ике тотҡалы йомро йышҡы, ҡырғыстар ҙа булған. Йышҡы 20-нән 40 сантиметрға тиклем оҙонлоҡтағы үткерләнгән пластина рәүешендә булған. Был инструмент ағас олонон тыштан эшкәртеү өсөн тәғәйенләнгән, ә түңәрәк йышҡы менән үҙағасты эстән һоҫҡан кеүек сығарғандар.



Йышҡы.
РЭМ фондынан.
XX быуат башы.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ХОҠУҠ*

# ӨЙҘӘН ТОРОП - СУД УЛТЫРЫШЫНА



**РФ Дәүләт Думаһы тәүге уҡыуҙа суд ултырыштарын дистанцион тәртиптә үткәреү тураһында закон проектын ҡабул итте.**

Юллаусылар, яуап биреүселәр һәм шаһиттар суд эшендә веб-конференция буйынса телефон, планшет йәки компьютер ярҙамында ҡатнаша ала. Бының өсөн "Дәүләт хеҙмәттәре" порталында суд ултырышында ҡатнашыусының шәхси кабинетын булдырырға кәрәк буласаҡ. Был яңылыҡ арбитраж һәм граждандар кодекстарында, шулай уҡ административ суд башҡарыу кодексында үҙгәрештәр талап итәсәк. Бынан тыш, юллау ғаризаһы, ялыуҙар һәм башҡа документтарҙы ла өйҙән бирергә мөмкин буласаҡ.

-Кемгә ҡасан да булһа судтарҙа граждандар, административ йәки енәйәт эштәре менән осрашырға тура килгән, улар эштәрҙең нисек оҙаҡ ҡаралыуы, судта ҡатнашыусыларҙың килмәүе сәбәпле йыш ҡына кисектерелеүе тураһында яҡшы белә. Ә бит кешеләр эштәрен ташлап, алыҫтарҙан килә, аҡсаларын тотона. Был йәһәттән судьяларҙы ғәйепләргә кәрәкмәй, сөнки ул бит судта ҡатнашыусыларҙың бөтәһен дә тыңларға тейеш. Индереләсәк үҙгәрештәр кешеләрҙе даими рәүештә судҡа йөрөү менән бәйле проблемаларҙан ҡотҡарасаҡ, сөнки судтарға үҙ сиратында эштәрҙе тиҙ һәм ығы-зығыһыҙ ҡарарға ла мөмкинлек тыуа. Шулай итеп, кешегә өйөнән сыҡмайынса, эшенән айырылмайынса ғына судҡа ғариза бирергә, видеобәйләнеш буйынса суд эшендә ҡатнашырға, юллауҙарын белдерергә, эш материалдарын өйрәнергә һәм суд ҡарарын алырға мөмкинлек була,- тип аңлатма бирә Дәүләт Думаһы депутаты Зариф Байғусҡаров.

Закон проекты ултырышта ҡатнашыусының шәхесен уның ҡатнашлығынан тыш та мәғлүмәт-технология саралары ярҙамында аныҡлау мөмкинлеген бирә. Арбитраж суд техник мөмкинлек булмаған йәки эш ябыҡ режимда ҡаралған осраҡта ултырышта дистанцион ҡатнашыуҙы рөхсәт итмәҫкә хоҡуҡлы. Закон проектына ярашлы, судҡа электрон повестка һәм судтан башҡа төрлө хәбәрҙәр Берҙәм портал аша һәм электрон документтар әйләнеше системаһы ярҙамында еткерелә. Был осраҡта уларҙы адресатҡа тапшырыу ваҡыты һәм факты тейешле мәғлүмәт системалары тарафынан теркәлә. Суд процесында ҡатнашыусы үҙен Берҙәм портал аша хәбәрҙар булып тороуға ризалығын биргән хәлдә тейешле кимәлдә мәғлүмәт алған булып иҫәпләнә. Судта техник мөмкинлектәр булғанда эште ҡарауҙа ҡатнашыусыларға электрон материалдарға рөхсәт биреләсәк. Закон проекты ҡабул ителгән хәлдә ул 2021 йылдың 1 сентябренән көсөнә инәсәк.

# СИРЛЕЛӘР МАШИНА ЙӨРӨТМӘЙ



**Сәләмәтлек тороштарына нигеҙләнеп, Рәсәйҙә водителдәрҙе машина йөрөтөү хоҡуғынан мәхрүм итеү ҡарала. Эске эштәр һәм Һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтары был йәһәттән бергәләп эш итеү хаҡында килешкән. Хәҙер улар сираттағы медкомиссияны көтөп тормайынса ла водитель таныҡлығын тартып алырға мөмкин. Был хаҡта "Автостат"агентлығы хәбәр итә.**

Был яңы тәртип 2022 йылдың 1 мартынан ғәмәлгә инә. Әлеге көндә водитель таныҡлығы алыу өсөн медкомиссия үтергә һәм шул нигеҙҙә 10 йылға (водитель таныҡлығы мөҙҙәте) медицина белешмәһенә эйә булыу кәрәк. Ләкин был ун йыл эсендә кешегә транспорт саралары менән идара итеү мөмкинлеге бирмәгән сирҙәр барлыҡҡа килеүе ихтимал. Эске эштәр һәм Һаулыҡ һаҡлау министрлыҡтары водителдең транспорт йөрөтөргә ярамаған сире асыҡланған хәлдә дәүләт һәм шәхси клиникаларҙа был хаҡта ЮХХДИ-ға хәбәр итеү бурысын йөкмәтә аласаҡ. Һаулығы буйынса ғәмәлдәге сикләүҙәр исемлегендә күҙ ауырыуҙары (һуҡырлыҡ, ахроматоскопия), психик сирҙәр (шизофрения, аҡыл зәғифлеге), аяҡ-ҡул эшмәкәрлеге боҙолоу һәм башҡа сирҙәр инә. Машина йөрөтөүҙе сикләүсе былдай сирҙәр асыҡлана ҡалһа, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы электрон документ әйләнеше ярҙамында ЮХХДИ-ға был хаҡта кисекмәҫтән хәбәр итә, ә инспекторҙар үҙ сиратында водителде ваҡытлыса йәки бөтөнләйгә машина йөрөтөүҙән мәхрүм итә ала. Әгәр водитель сирле булыуға ҡарамаҫтан руль артына ултыра икән, унан штраф түләтелә. Ведомстволарҙа ошо юл менән сирлеләрҙе генә түгел, алкоголик һәм наркомандарҙы ла асыҡларға мөмкин булыуына ышаныс белдерәләр. Һәр хәлдә, шик тыуҙырыу осраҡтарында водителде өҫтәмә медицина тикшереүе үтергә ебәрергә мөмкин буласаҡ.

# ЙӘШЕРТЕН БУЛМАЯСАҠ



**БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары йыл аҙағына тиклем "Башҡортостан Республикаһы Экология кодексына үҙгәрештәр индереү тураһында" закон проектын ҡабул итергә ниәтләнә.**

Документты тәүге уҡыу майҙа булғайны. Проект буйынса Экология кодексына хәҙер "тирә-яҡ мөхит торошо хаҡында экологик мәғлүмәт" тигән төшөнсә индереләсәк. Былдай мәғлүмәт асыҡ буласаҡ һәм уның дәүләт сере менән бәйле булмағандарына сикләүҙәр индерелергә тейеш түгел, тип әйтелә был хаҡта аңлатмала. Аныҡлабыраҡ әйткәндә, былдай мәғлүмәттәр тупраҡ, һыу һәм һауаның бысраныуына, радиация торошона, бысратыусы стационар сығанаҡтарға, улар тирә-яҡ мөхиткә сығарып ташланған зарарлы матдәләрҙең кимәле һәм күләменә, етештереү һәм ҡулланыу ҡалдыҡтары менән эш итеүгә, уларҙың тирә-яҡ мөхитте бысратыу кимәлен кәметеү кеүек мәсьәләләргә ҡағыла. "Тирә-яҡ мөхиттең торошо хаҡында дөрөҫ мәғлүмәткә эйә булыу һәр граждандың хоҡуғы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ысынбарлыҡта юл ябыҡ булып сыға. Былдай мәғлүмәттәргә, ғәҙәттә, бик әҙ һандағы ведомство һәм ойошмалар ғына эйә була һәм мәғлүмәттәр йәшереп тотола. Ә экологик мәғлүмәткә ихтыяж бик ҙур, айырыуса Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат һәм башҡа сәнәғәт үҙәге ҡалаларында йәшәүселәрҙә. Закон ҡабул ителгәс, башҡарма власть органдары, урындағы үҙидара органдары һәм уларҙың вәкәләтле ойошмалары тирә-яҡ мөхит торошо хаҡында үҙҙәренә билдәле мәғлүмәттәрҙе асыҡ сығанаҡтарҙа баҫтырып сығарырға тейеш буласаҡтар", - тине республика парламенты рәйесе Константин Толкачев.

# ТЫНЛЫҠТЫ БОҘМА!



**Башҡортостанда тынлыҡ тураһындағы законды боҙоусыларҙы яуаплылыҡҡа тарттырыу буйынса эште көсәйтәсәктәр. Сөнки, парламентарийҙар билдәләүенсә, ғәмәлдәге штрафтар һөҙөмтәле эшләмәй.**

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: төнгө тынлыҡты боҙған өсөн штраф күләме граждандарға 2000-дән 3000 меңгә, вазифалы кешеләргә 5000-дән 8000-гә тиклем, юридик шәхестәргә 20000-дән 30000 һумға тиклем. Хоҡуҡ боҙоу ҡабатланған осраҡта уның күләме тағы ла артасаҡ. Әлеге ваҡытта Граждандарҙың тыныслығын һәм төнгө тынлығын боҙоу тураһында Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында кодекстың 13.5-се статьяһы буйынса комиссия эшләй. Закон проекты ҡабул ителһә, яңы тәртип һөйләшеп-килешеп булмаған, шау-шыу яратҡан күршеләрҙе урынына ултыртырға булышлыҡ итәсәк.

Әйткәндәй, былтыр ошондай хоҡуҡ боҙоуҙар буйынса административ комиссия 6000-дән ашыу эште ҡараған. Хоҡуҡ боҙоусыларҙы гел генә яуаплылыҡҡа тарттырып булмауы билдәле. Улар менән эшләү вәкәләте административ комиссиянан мировой судьяларға тапшырылһа, эш икенсерәк төҫ алырға тейеш.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

14

# Ғаиләм-ҡәлғәм

14-20 август (урағай)
2021 йыл
№33 (971)

ҠУЛ БЕЛГӘН ШӨҒӨЛ

# БАЛ ҠОРТОНОҢ БАЛЫ БАР,

## балдан алда наҙы бар

**Йыл һайын августың икенсе йәкшәмбеһендә республикала Умартасылар көнө билдәләнә. Хәсән ауылында йәшәгән Фатиха һәм Фаат Зиннуровтар ҙа хаҡлы рәүештә был көндө үҙҙәренең һөнәри байрамы тип иҫәпләй. "Баллы" шөғөлгә ныҡлап тотоноуҙарына егерменән ашыу йыл үткән.**



- Кешенең мөмкинлеге шул тиклем ҙур. Нимәгә булһа ла өйрәнергә, ниндәй ҙә булһа яңы эшкә тотонорға, үҙеңдең һәләтеңде асырға бер ҡасан да һуң түгел, - ти Фатиха Солтан ҡыҙы. - 2000 йылдың баштарында ғаиләбеҙ менән Красногорка ауылы янында 1 гектар тирәһе ерҙе ҡуртымға алып, виноград, сейә, гөлйемеш, ҡарағат, алма кеүек емеш-еләк ағастары һәм ҡыуаҡтары ултыртыу менән шөғөлләнә башланыҡ. Тәбиғәттең был хозур урыны беҙҙе үҙенә шул тиклем ылыҡтырҙы, саҡ ҡына буш ваҡытыбыҙ булыу менән ашҡынып торҙоҡ. Нөгөш йылғаһынан дүрт саҡрым йөрөп, һыу ташып ҡойоу ҙа бер ни торманы. Ултыртҡан үҫемлектәребеҙ күҙгә күренеп үҫә башлағас, күңелебеҙ тағы ла ныҒыраҡ күтәрелде. Унда яңы дуҫтар, фекерҙәштәр таптыҡ. Тиҙҙән Салауаттан килеп йөрөгән бер умартасынан бер баш ҡорт алып, уны йылдан-йыл арттырып, ҡортсолоҡ эшенә бирелеп китеүебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалдыҡ.

Ҡан хәтере, гендар, нәҫел кеше яҙмышында ҙур роль уйнай. Зиннуровтарҙың икеһенең дә ата-әсәһе, өләсәй-олатайҙары заманында билдәле умартасы булған. Шуға ла Фатиха апай менән Фаат ағайға был эшкә тиҙ өйрәнеп ала. Эшһөйәрлек, бөхтәлек, бөтмөрлөк кеүек сифаттар ҙа әсәй-атайҙан күскән тип иҫәпләй улар.

- Бал ҡорто таҙалыҡ, тәртип ярата. Әгәр ҙә кешелә был һыҙаттар юҡ икән, умарта ишәйтеп, балдан мул уңыш алыу икеле, - тип әңгәмәгә ҡушыла Фаат Әбүбәкер улы. - Был бөжәктәр ҡабаланғанды яратмай, йәғни улар янында эшләгәндә ашығырға ярамай. Умартаны асып ҡараған ваҡытта бик һаҡ ҡыланырға кәрәк. Улар кәйефте тоя, яндарында матур уйҙар менән генә йөрөү мөһим. Кейемең, тотонған инструменттарың, әйберҙәрең генә түгел, күңелең дә таҙа булырға тейеш. Шул сағында ғына уңыш алырға иҫәп торорға мөмкин.

Балдың файҙаһын барыбыҙ ҙа беләә. Ә бына уның мөғжизәле бөжәк икәнен бөтәбеҙ ҙә белмәҫкә лә мөмкин. Балы ғына шифалы түгел, ҡорттан саҡтырып, байтаҡ сирҙән дә арынып була. Был йән эйәләренең сихәте, дауаһы тураһында хатта Ҡөрьәндә лә яҙылған. Уның 16-сы сүрәһе "Бал ҡорто" тип аталып, 68-69-сы аяттар бал ҡорто һәм балдың шифаһына арналыуы ғына ла күп нәмә тураһында һөйләй торғандыр.

- Бал ҡорто тотҡан кешегә алдашырға ярамай. Ғәҙел, намыҫлы булғанда ғына килем алырға мөмкин. Был - аксиома. Бер йыл алдаһаң, икенсе йылына уңышын бөтөнләй күрмәҫкә лә мөмкин. Тәжрибәле умартасылар күптән иҫбат иткән дәлил, - ти Фатиха апай.

Йомарт булырға кәрәк, тигәнде лә ишеткәнебеҙ бар. Үҙемдең әсәй-атайым да беренсе айырткан балдан күрше-тирәне, туғандарҙан ауыҙ иттерә торғайны.

- Ҡорт хәйере тип атала ул, - тип дауам итә хужабикә. - Беҙ ҙә йыл һайын тәүге бал менән күршеләрҙе, туғандарҙы, дуҫтарҙы һыйлайбыҙ. Артып ҡалғанын һатабыҙ. Элегерәк йәрминкәләргә йөрөнөк, баҙарға сыға инек. Һуңғы йылдарҙа өйҙән генә килеп алалар, балдың сифатын, сихәтен яҡшы белгән даими клиенттарыбыҙ бар.

Иғтибар иткәнегеҙ барҙыр: умартасылар йәшерәк тә, сәләмәтерәк тә күренә. Икеһе лә олпат йәштә булыуына ҡарамаҫтан, Зиннуровтарҙың йөҙөндәге һырҙар ҙа тәрән йыйырсыҡ булып түгел, ә тигеҙ, яҡты нур булып ятҡан. Бер ҡасан да кеше уңышына көнләшеп, үҙҙәрен кәмһетмәгәнгә эске балҡыштары, тыныс уйҙары, сабыр аҡылдары ла нурлайҙыр уларҙы. Ике улының, ейән-ейәнсәрҙәренең уңыштарына ҡыуанып, уларҙың ҡәҙер-хөрмәтен, яҡындарының иғтибарын тойоп, илле йылға яҡын бер бөтөн булып йәшәүҙәре лә ҙур роль уйнағандыр. Был тормошта барыһы ла бер-береһенә бәйле бит.

**Лена БАРЫЕВА.**

ӘЙТӘГҮР!

# ОЯҺЫНДА НИ КҮРҺӘ...



**Ғаилә - ул атай-әсәй, ағай-ҡусты, апай-һеңле, йәғни туғанлыҡ ептәре менән тығыҙ бәйләнгән бик яҡын кешеләр берләшмәһе. Һәм уның үҙ ҡанундары, тәртиптәре лә була. "Ояһында - ни, осҡанында - шул", ти бит халыҡ та. Шуның кеүек тормоштоң тәүге дәрестәрен, үкенескә ҡаршы, тәүге хата аҙымдарын да әҙәм үҫкән ғаиләһендә ала. Ғаилә ҡанундары ниндәй улар? Ғаиләлә бала нимәләргә өйрәнә ала? Кемдән үрнәк ала? Һәм ғаилә алдында уның ниндәй бурыстары бар? Был һорауҙарға яуаптарҙы гәзит уҡыусыларыбыҙ һөйләгәндәрҙән эҙләнек.**

***Элзилә КИРАМАНОВА, Баймаҡ районы:*** Беҙ үҫкән ғаиләлә атайға иң абруйлы вазифа итеп ҡаралды. Әсәйем уның уйҙарын, әйтерен һиҙеп-күреп тора торған бер прибор һымаҡ ине хатта. Һәм иплəп кенә уны: "Быны шулай эшләһәк, нисегерәк булыр икән?"- тип, тейешле яҡҡа бора ине. Атайым аҡсаны үҙе тотто. Ергә, мал-тыуар башына һалымды үҙе түләне. Бик хәстәрлекле ине. Мәҫәлән, йәй ваҡыттында утын алып, бесәнгә тиклем утынды ҡул бысҡыһы менән бысып, ярып ҡуя инек. Аҙыҡ-түлекте лә һәр саҡ тоҡлап алыр ине. Кейем тураһында инде әйтеп тораһы ла юҡ. Был балаға шул кәрәк, тегенеһенә был кәрәк, тип, әсәйем әйтеп тора, ул ала. Әсәйемде лә ул яҡтан ҡыйырһытманы, матур кейендерҙе. Атайыбыҙ тәмәке тартманы, араҡы ла эсмәне. Шөкөр, беҙҙе лә шулай өйрәтте, яман ғәҙәттәрҙән ныҡ тыйҙы.

Үҙе бик бөхтә кеше ине, көтөүсе генә булһа ла, һәр ваҡыт костюм менән йөрөнө. Кис клубҡа сыҡһаҡ, төнгө сәғәт 12-лә өйҙә булырға ҡуша. Уның һүҙен йығыу йәки ҡаршы сығыу тигән уй башҡа ла инмәй. Атай абруйына шул хәтлем ныҡ буйһонғанбыҙ. Атайыбыҙ ысын Ислам ҡанундары менән йәшәгән, тип уйлайым.

Үкенескә ҡаршы, бөгөн бына ошондай атай абруйы юҡҡа сығып бара. Атай абруйы булмағас, ғаиләлә бөтөн ҡанундар ҙа йомшара. Элек беҙҙә өлкән ағай-апайҙар бәләкәстәре өсөн ғүмергә яуаплы инеләр. Бәләкәстәре олоғайған ағай-апайҙарын ташламаҫҡа, ярҙам итергә тейеш инеләр. Кемдер туғанын ҡарашмаһа, хәлен белешеп, ярҙамлашып йөрөмәһә, йәмһеҙ, ярамаған күренеш тип ҡабул итәләр ине. Бөгөнгө ғаиләләрҙә күпселек ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәре хужа булырға теләй. Ир -егеттәрҙең уй-фекерҙәре менән иҫәпләшмәй, уларҙы аҡса алып килеп биреүсе итеп кенә күрә.

Ҡыҙымдың ғаиләһе менән йәшәйем. Аллаға шөкөр, кейәүем донъяның бөтөн мөһим эштәрен үҙе хәстәрләп, ғаиләһен матур итеп ҡарай. Ҡатыны ҡайҙан-нимә табайым тип ултырмай, сөнки ире намыҫлы, яуаплы кеше. Ял көнө ейәнем ҡайтһа, беҙ залда йыйылып, күмәкләп сәй эсәбеҙ һәм берәй яҡшы кино ҡарайбыҙ, йә концертҡа барабыҙ. Ошондай берҙәм саралар ғаиләне яҡынайта йәки бер-береңә хөрмәт уята, тип уйлайым.

***Салауат ЗАРИПОВ, Салауат ҡалаһы:*** Элек ғаиләләр өләсәй-олатайҙар менән бергә йәшәне бит. Мин дә ҡартәсәйле ғаиләлә үҫтем. Ул хатта атайымды - улын да үҙ ихтыярында тота ине. Атай эштән һуңға ҡалып, эсеп-маҙар ҡуйһа ла, ҡартәсәй уны эҙләп табып алып ҡайта. Ә әсәй улайтып йөрөргә атайҙан ҡурҡа. Әсәһенә атай өндәшә алмай, хатта әрләһә лә, шым ғына тыңлай. Әсәй менән атай үҙ-ара талашып киткәндә лә ҡартәсәй уларҙы тыя торғайны. Шуға өйҙә ыҙғыш-маҙар бик һирәк кенә ишетелде.

Ҡартәсәй мине лә күп нәмәгә өйрәтте. Ағайҙарыңды тыңла, уларға һин ҡаршы әйтергә тейеш түгел, тине. Һеңлеңде яҡлашып, ҡарап йөрөргә бурыслыһың, тине. Өйгә һеңлемһеҙ ҡайтып инһәм, кире бороп сығарып ебәрә торғайны. Йәки һеңлемде асыҡтырып, оҙаҡ йөрөтһәм дә әрләй, өҫ-башын ҡарамай өшөтһәм дә әләгә. Бөтөн был хәстәрҙең минең өҫтә икәнен белеп-аңлап үҫелде. Шуға әле лә, үҙебеҙ арыуыҡ олоғайһаҡ та, һеңлемде уйлап йөрөйөм, ярҙам итергә тырышам.

***Альбина ТАҢҒАТАРОВА, Өфө ҡалаһы:*** Ғаиләлә балаларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен атай-әсәй көйләй. Уларҙы бер-береһенә яҡшы мөнәсәбәттә булырға, яратырға, яҡлашырға, хәстәрләргә өйрәтә. Шул уҡ ваҡытта быңдай тәрбиәне бирә алыу өсөн ата-әсәнең дөрөҫ йәшәүе лә зарур. Эскән ата-әсәнән, мәҫәлән, ниндәй яҡшылыҡҡа өйрәнһен бала? Шуның кеүек, балаң нисек булырын теләһәң - үҙең шулай бул.

Мин ике малайҙы яңғыҙ үҫтерәм. Аталары эскәс, беҙҙе ҡыйырһытҡас, айырылыштыҡ. Улдарымды нисек тә "йәшел йылан"дан йыраҡ тоторға тырышам, аталарының хаталарын ҡабатламаһындар, тием. Уларҙың иңенә йәшәйеш проблемаларын да һалам. Мәҫәлән, коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙе тикшереп тороуҙы, аҙыҡ-түлектең самаһын белеүҙе, нимә кәрәк икәнде ҡарауҙы, баҙарға йөрөүҙе лә улар икеһе башҡара. Уҡыуҙарын да үҙ яуаплылыҡтарына һалғанмын. Тырышалар былай, спорт менән дә шөғөлләнәләр. "Мин ҡатын кеше, миңә һалышмағыҙ, ә бына мин һеҙгә һалышырға мөмкинмен", тием уларға. "Ярай, әсәй, эшләй башлаһаҡ, һине өйҙә генә тотасаҡбыҙ, күлдәк тә, хушбуй ҙа, туфли ҙа алып бирәсәкбеҙ",- тип хыялланып алалар. Балалар бит инде.

Үҙем атайлы үҫкәс, арҡалы булдым һәм улдарыма шул арҡа етмәүен яҡшы төшөнәм. Шуға уларҙы ирҙәр тауышына, холҡона күнһендәр, ҡатылыҡ күрһендәр, тип, ауылға ағайым ҡулына ебәреп алам. Ғаиләлә ир тәрбиәһе - ул күҙгә күренмәҫ, әммә тойола торған ҡөҙрәтле көс шул.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Аллаһы Тәғәлә бушҡа ғына балаларҙы ике кеше союзынан яралтмаған һәм ир менән ҡатынды ғаилә итеп берләштермәгән. Балаларҙы тәрбиәләп үҫтереүҙә уларҙың икеһенең дә үҙ роле бар. Һәм ғаиләнең ҡанундары ла тап ана шул ике енес вәкилдәренең тәбиғи мөмкинлектәренә ҡарап яратылған. Был ҡағиҙәләр боҙолһа йәки ҡанундарҙан тайпылыш булһа, ғаиләгә зыян килә. Сөнки ғаилә законддары улар шул уҡ кешелек законддары.**

**Лилиә СӘЙҒӘФӘРОВА яҙып алды.**

# ИЖАДҠА ҒАШИҠТАР...

## үҙҙәренең йөрәк тауышын тыңлай белә

(Башы 1-се биттә).

**Был донъяла һәр кемдең күктәр тарафынан яратылған үҙ яртыһы була. Мәле еткәс, бәндә шул икенсе яртыһын эҙләй башлай. Таба алһа ғына бәхетле була, тиҙәр. Ә һеҙ бер-берегеҙҙе "икенсе яртым" тип әйтә алаһығыҙмы?**

**Гөлсәсәк:** Бер-беребеҙҙе күреү менән сат йәбештек (көлә). Беренсе осрашыуыбыҙ 2001 йылда Сибай сәнғәт мәктәбендә уҡып йөрөгәндә булды. Заһир унда эшләй ине. Студенттарҙың "Ете ырыу" ансамбленә йөрөгәндә таныштыҡ беҙ. Ул флейтала уйнай ине, мин - думбырасы.

Ошо осрашыуҙан алда ғына башҡа тиҫтерҙәремдән айырмалы, гел көнкүреш тауарҙары, хужалыҡ кәрәк-ярақтары магазинына ингем килә. Унда матур һауыт-һаба, түшәк йыйылмаларын иҫем китеп ҡарайым, аҡса булғанда оҡшағандарын һатып алам. Шунда бер апай: "Гөлсәсәк, һиңә кейәүгә сығырға ваҡыт", - тип уйынлы-ысынлы әйткәйне. Ысынлап та, үҙем дә һиҙмәҫтән, күңелем менән үҙемдең ғаилә усағын яғыуға тартылып йөрөгән булғанмындыр инде.

**Заһир:** Минең дә ғаиләле булғым килеп йөрөгән ваҡыт ине. Әммә әлегә күңел ятҡан кешене генә осратмағанмындыр инде. Гөлсәсәкте күреү менән уның үҙемдең яртым икәнен аңланым. Үҙе матур, үҙе тәрбиәле. Уның менән һөйләшеүе, тормоштоң бөтә өлкәһенә ҡағылышлы темаларға әңгәмә ҡороуы шул тиклем еңел ине. Осрашһаҡ, һөйләшеп һүҙебеҙ бөтмәй торғайны. Быға тиклем бер-береһен белмәгән ике кешенең һүҙҙәре, уйҙары берегеүен, уртаҡ фекерҙәр булыуын "бер-берендең яртыһы" тип аңларға булһа, беҙ үҙебеҙҙең икенсе яртыбыҙҙы тапҡанбыҙ тип әйтергә була инде.

Дуҫлашып йөрөгәндә бер осрашыу хәл иткес булды. Замана ҡыҙҙары һәм егеттәре мөнәсәбәттәре тураһында әңгәмәләшә инек. Гөлсәсәктең: "Хәҙерге ҡыҙҙар байға сығып, бер нәмә лә эшләмәй генә йәшәү тураһында хыяллана, ә минеңсә, бергәләп тапҡан, бергәләп өлгәшкән нәмәләр ҡәҙерлерәк", - тип әйтеүе миңә бик оҡшаны һәм ғүмер буйы ошондай кешене эҙләгәнемде аңланым.

**Гөлсәсәк:** Холҡобоҙҙағы һәйбәт һыҙаттарҙы тиҙ күрҙек, шуға ла бер-беребеҙҙе һынап күп йөрөмәнек. Уртаҡ уйҙар, маҡсаттар күп булыуы беҙҙең араны ҡыҫҡа ваҡытта нығытты. Бер йыл дуҫлашып йөрөгәндән һуң, дөрөҫөрәге, мин уҡып бөткән йылды өйләнештек һәм Сибай сәнғәт мәктәбендә бергә эшләй башланыҡ.

**Кем ғөрөф-ғәҙәткә ышана, ысынлап та, юрағаны юш килә. Хыял менән дә шулай, тиҙәр. Хыялың, ниттәрең бойомға ашыуына ышанһаң, мотлаҡ бойомға аша...**

**Заһир:** Теләкте лә дөрөҫ теләргә кәрәк. Ә хыял - ул маҡсат. Уның тормошҡа ашыуын теләһәң, уға ынтылырға кәрәк. Өйләнеп, бергә йәшәй башлаған йәштәрҙең иң изге теләге, әлбиттә, үҙеңдең ҡыйығыңды булдырыу. Беҙ ҙә торлаҡлы булыуҙың төрлө варианттарын өйрәндек, уртаға һалып төрлөсә кәңәшләштек тә йәш ғаиләләр өсөн программала ҡатнашып, тиҙҙән ҙур яңы йорттан фатир алдыҡ.

**Гөлсәсәк:** Хыялды ысын итеп йәшәү өсөн һәр кемдән ихтыяр көсө, эшһөйәрлек, ныҡышмалыҡ, маҡсатҡа ынтылыш, бер-берендә дәртләндереү, ярҙам итеү талап ителә. Икебеҙ ҙә тик кенә ятып, бер ни ҡыбырҙатмай хыялланып, матур тормошҡа, әҙерҙән-бәҙергә өмөт иткән, кемдер килтереп бирер тип ултырған заттарҙан түгелбеҙ. Тормош ҡороу менән ең һыҙғандыҡ. Донъяны алып барыу өсөн икебеҙ ҙә бер рәттән иртәнән кискә тиклем эшләһәк тә, ғаилә усағын йылы тотоуға, ғаилә ҡотон булдырыуға берҙәй тырыштыҡ, бергә көс һалдыҡ. Тәмләп, яратып башҡарған эш кенә уңышлы килеп сығыуын бәләкәйҙән белеп үҫкәнгә, мин дә, Заһир ҙа, өйҙә булһынмы, эш урынындамы - бөтә нәмәгә ижади ҡараныҡ.

**Заһир:** Иң мөһиме - ятраҡан эшебеҙ булыуы. Күңелең, йәнең теләгән эш менән булыу бер ҡасан да арытмай, ялҡытмай. Киреһенсә, яңынан-яңы маҡсаттар ҡуйып, үргә атларға этәргес бирә. Килеп тыуған проблемаларҙы ла, ҡаршылыҡтарҙы ла еңелерәк үтәһең. Эшебеҙгә ни тиклем мөкиббән булһаҡ та, ғаилә, балалар барыбер беренсе урында булды.

**Һәр дәүер, һәр быуын тарих алдында һынау тота. Үҙе өсөн дә. Ғаиләһе өсөн дә. Хатта иле өсөн дә. Һеҙ - дүрт балаға ғүмер бүләк иткән әсәй-атай. Донъяла барған глобалләшеү заманында бала тәрбиәләүе, уларҙы илһөйәр, телһөйәр итеп үҫтереүе, нимә генә тимәһендәр, ярайһы ҙур мәсьәлә. Балалар тәрбиәләгәндә уларҙа, тәү сиратта, ниндәй сифаттар күрергә теләйһегеҙ? Гәзит уҡыусылар менән тәрбиә алымдарығыҙ тураһында таныштырып үтегеҙ әле.**

**Заһир:** Иң беренсе, балаларыбыҙ үҙҙәрен яуаплы тойоп үҫеүҙәрен теләйем. Ҡылған ҡылығы, әйткән һүҙе, эшләгән эше өсөн. Яҡындары, дуҫтары өсөн. Бөгөнгө йәштәргә ошо сифат бик етешмәй. Шулай уҡ балаларыбыҙҙың хәҙерге заман ҡалаһының этнос бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыуға үҙ өлөшөн индерерлек камил үҫешкән башҡорт рухлы шәхестәр булыуын күргем килә. Баланың ҙурайғас ниндәй кеше булып китеүендә ғаиләнең роле бик ҙур. Ниндәй мөхиттә үҫәһең, шундай шәхес булып формалашаһың. Шуға күрә улыбыҙ, ҡыҙҙарыбыҙға иң яҡшы тәрбиә мөхите булдырырға тырышабыҙ. Шулай итегеҙ, былай эшләгеҙ, тип түгел, ә үҙебеҙҙең өлгөлә тәрбиәләйбеҙ. Кешелеклек сифаттарының күбеһе атай-әсәйҙән килә, ә бала уны күреп үҫә, күргәнен, ишеткәнен тормошта һынай. Быуындар бәйләнеше шунан башлана. Шуға ла мин эшһөйәрлек, әҙәплелек, ярҙамсыллыҡ, яуаплылыҡ, кешелеклелек кеүек сифаттарҙы мәңгелек ҡиммәттәргә тиңләйем. Балаларыбыҙҙың туған телен, тарихын, мәҙәниәтен белгән, улар менән ғорурланған кешеләр булып, Ватанына файҙалы ул һәм ҡыҙҙар булып үҫеүен теләйбеҙ.

**Гөлсәсәк:** Бала тәрбиәләү һәр заманда ла еңел булмаған. Был мәсьәлә ата-әсәнән ҙур аҡыл, сабырлыҡ талап итә. Үҫмерҙәрҙе бөгөн урамға саҡырған бик күп кире күренештәр бар. Ана шуларға ылығып китмәһен өсөн уларҙың буш ваҡытын файҙалы шөғөлдәр менән үткәреүенә ҙур иғтибар биреү мөһим. Аҡса юҡлыҡҡа, мөмкинлектәр сикле булыуға һылтанырға ярамай. Баланы тапҡас, уны төрлө яҡлап үҫтереүгә, аяғында ныҡлы баҫып торған кеше итеп тәрбиәләргә кәрәк. Һәр бала үҙ ризығы менән тыуа, тигәндәре бик дөрөҫ. Беҙҙең ғаилә һәр сабыйға тәғәйенләнгән ярҙамды алып тора. Беренсе бала тыуғас, ипотекаға алған фатирҙың 8 квадрат метры өсөн дәүләт түләне. Икенсе балаға Әсәлек капиталы алдыҡ. Өсөнсөһөнә бушлай ер участкаһы бирелде. Дүртенсеһе донъяға килгәс, Путин ярҙамын тойҙоҡ.

**Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр, тип әйтәһегеҙ инде. Улайһа, күрәҙәлек ҡылырға мөмкинме? Һеҙ икегеҙ ҙә йыр-моңға ғашиҡ, башҡорт йыр сәнғәтен белгән, илһөйәр, телһөйәр ғаиләлә үҫкәнһегеҙ...**

**Гөлсәсәк:** Дөрөҫ, беҙ икебеҙ ҙә бала саҡтан әсәй-атайыбыҙ-



*Иң беренсе, балаларыбыҙ үҙҙәрен яуаплы тойоп үҫеүҙәрен теләйем. Ҡылған ҡылығы, әйткән һүҙе, эшләгән эше өсөн. Яҡындары, дуҫтары өсөн. Бөгөнгө йәштәргә ошо сифат бик етешмәй. Шулай уҡ балаларыбыҙҙың хәҙерге заман ҡалаһының этнос бөтөнлөгөн һаҡлап ҡалыуға үҙ өлөшөн индерерлек камил үҫешкән башҡорт рухлы шәхестәр булыуын күргем килә. Баланың ҙурайғас ниндәй кеше булып китеүендә ғаиләнең роле бик ҙур. Ниндәй мөхиттә үҫәһең, шундай шәхес булып формалашаһың. Шуға күрә улыбыҙ, ҡыҙҙарыбыҙға иң яҡшы тәрбиә мөхите булдырырға тырышабыҙ. Шулай итегеҙ, былай эшләгеҙ, тип түгел, ә үҙебеҙҙең өлгөлә тәрбиәләйбеҙ. Кешелеклек сифаттарының күбеһе атай-әсәйҙән килә, ә бала уны күреп үҫә, күргәнен, ишеткәнен тормошта һынай.*

✓ *Ғаиләлә мин бер генә бала инем, әсәй ҡаршы төшкәс, өйләнмәнем, өйләнһәм, балабыҙ булһа, мин атай ғына түгел, әсәйем дә өләсәй булыр ине. Үҙенең тар ҡарашлы, тар күңеллеге арҡаһында "өләсәй" һүҙен дә ишетмәй донъя ҡуйҙы.*

ҙан башҡорт йырын-моңон тыңлап, халҡыбыҙҙың тылсымлы, шифалы ижад өлгөләрен йөрәгебеҙгә һеңдереп үҫкән кешеләрбеҙ. Мин сығышым менән Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы ҡыҙымын. Үҙемде белә-белгәндән атайым Урал Хәсән улы гармунда һыҙҙыра ине, матур йырланы. Әсәйем мандолинала уйнаны, ҡалаҡ һуҡты. Уны шулай уҡ оҫта таҡмаҡсы, бейеүсе лә тип хәтерләйҙәр.

Ҡайным менән ҡәйнәм дә - башҡорт музыка сәнғәтенә ғашиҡ кешеләр ине. Әбйәлил районы Ишҡол ауылында ҡәйнәм Хафиза Әхиәр ҡыҙы музыка дәресенән уҡытты, ҡайным Рәхимйән Ситдиҡ улы матур йырлай торғайны.

**Заһир:** Хәҙер балаларыбыҙ беҙҙең юлдан атлай. Өлкән ҡыҙыбыҙ Заһиҙә сәнғәт училищеһында музыка теорияһы бүлегендә думбыра класында уҡый. Фатима Мостафина исемендәге 20-се урта мәктәптең 6-сы класын тамамлаған Нурмөхәмәт улыбыҙ балалар музыка мәктәбендә флейта һәм фортепьяно класында белем ала. Гөлнәзирәбеҙ урта махсус музыка колледжында виолончелдә уйнарға өйрәнә. Мин үҙем дә ошо белем биреү учреждениеһын тамамлағайным. Мәҙинәбеҙгә әлегә ике йәш. Ул да апайҙары-ағалары юлынан китһә, беҙҙең бер ҡаршылығыбыҙ ҙа юҡ. Музыкаға, ижадҡа ғашиҡ кеше бер ҡасан да юғалып ҡалмай ул. Ундайҙар үҙҙәренең йөрәк тауышын, күңел саҡырыуын тыңлай белә. Ә был һәләт иһә үҙеңде табырға, булмышыңды тиҙерәк аңларға булышлыҡ итә. Йыр-моң, бигерәк тә үҙ халҡының, туған музыкаһын ятраҡандар, белгәндәр нисә йәштә булыуҙарына ҡарамаҫтан, тормошҡа балаларса ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һәм һөйөү менән ҡарай. Улар көн һайын үҙҙәре өсөн яңы бер нәмә аса.

**Һеҙҙең икегеҙҙе лә йә ғаилә ансамбле, йә үҙегеҙ етәкләгән ижади коллективтар, йә уҡытҡан уҡыусыларығыҙ менән баш ҡала сәхнәләрендә төрлө кимәлдәге тантаналарҙа, конкурстарҙа, фестивалдәрҙә йыш күрергә мөмкин. Был саралар һеҙгә нимә бирә?**

**Гөлсәсәк:** Балалар менән конкурстарҙа ҡатнашыу, дөйөм эш менән булыу беҙҙе бер-беребеҙгә яҡынайта, бер-беребеҙҙе яҡшыраҡ аңларға, үҙебеҙҙең һәм ҡыҙҙарыбыҙ, улыбыҙҙың нимәгә һәләтле икәнлеген күрһәтергә ярҙам итә. Төрлө кимәлдәге конкурстарҙа юғары һөҙөмтәләргә өлгәшеүебеҙ беҙҙең һәр беребеҙҙең тырыш хеҙмәте ул. Ғаилә ансамблебеҙ, шулай уҡ педагогтар ҡатнашлығындағы "Аманат", "Гөлбостан" , "Уралтау", "Тамъян" ансамбле менән дә төрлө сараларҙа, конкурстарҙа, тантаналарҙа, байрамдарҙа сығыш яһайбыҙ. Унда беҙ фәҡәт үҙебеҙҙең ғаиләне генә түгел, ә тотош башҡорт ғаиләһе бына нисек булған, бар һәм буласаҡ тигән уйҙан сығып, уға бик етди ҡарайбыҙ. Музыкаль яҡтан ғына түгел, ә милли кухнябыҙҙы, милли сифаттарыбыҙҙы, ғөрөф-ғәҙәтәребеҙҙе үҙ эсенә алған дөйөм башҡорт донъяһын сағылдырабыҙ.

**Балаға исем һайлау белеү үҙе бер аҡыл булһа, исемде аҡлау - ҙур ғәмәл. Улығыҙға, ҡыҙҙарығыҙға халҡыбыҙҙың боронғо исемдәрен ҡушҡанһығыҙ. Исемдәрҙе кем һайланы?**

**Гөлсәсәк:** Тәүге ҡыҙыбыҙ тыуғас, атаһының исеменә оҡшаһын тип, Заһиҙә тип ҡушырға мин тәҡдим иттем. Улыбыҙҙың исеме Нурмөхәмәт төшкә инде. Ғөмүмән, балаларға исемдәрҙе бергә һайланыҡ. Гөлнәзирәне "гөл"дән башланһын тинек. Мәҙинәгә исем һайлағанда мәғәнәһенә иғтибар иттек: намыҫлы, гәҙел, матур тигәнде аңлата. Исем кешене матурламай, ә кеше исемде матурлай. Әлегә балаларыбыҙ үҙенең исемен уҡыуҙағы тырышлығы, төрлө кимәлдәге конкурстарҙағы уңыштары менән аҡлай.

**Бер көн артта ҡалһаң, биш көн йүгерерһең, тигән әйтемебеҙ бар. Бөгөн беҙ шул тиклем тиҙ үҙгәреүсән заманда йәшәйбеҙ. Бер көн артта ҡалһаң, биш көн түгел, аҙна-ун көн йүгерһәң дә ҡыуып етеп булмаҫ төҫлө. Яңылыҡҡа, камиллыҡҡа нисек ынтылаһығыҙ?**

**Заһир:** Тормоштан артта ҡалырға ярамай. Бөгөнгө заман мәғлүмәтле булыуҙы талап итә. Һөнәри эшмәкәрлегебеҙ, шулай уҡ белем биреү өлкәһендәге бар яңылыҡтар, үҙгәрештәр менән танышып барырға тырышабыҙ. Гөлсәсәк әйтеп китеүенсә, конкурстарҙа ҡатнашыуға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Бындай саралар беҙҙең кеүек кисен генә осрашҡан ғаилә ағзаларын нығыраҡ берләштерә. Ғөмүмән, балаларыбыҙ бәләкәйҙән төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, тормош менән сәхнәне тиң күреп үҫте, тиһәк, бер ҙә арттырыу булмаҫ.

**Гөлсәсәк:** Ятраҡан шөғөлдәр булыуы ла камиллыҡҡа ынтылырға булышлыҡ итә. Күңел һөйгән эш менән булыу беҙҙең ғаилә өсөн яҡшы кәйеф, сәләмәтлек сығанағы ла, тип уйлайым. Мин үҙем саҡ ҡына буш ваҡытым булһа, ҡулыма бәйләмемде алам. Был шөғөлгә 9 йәштә өйрәнгәйнем, 11 йәштә төрлө биҙәктәр уйлап сығарып, заказға ла, бүләккә лә бәйләй торғайным. Ә хәҙер ҡыҙҙарым да бәйләй, хатта улым да ырғаҡ менән бәйләргә өйрәнде. Һуңғы ваҡытта милли биҙәүестәр, ҡашмау тегәм. Эшебеҙ ҙә, хоббиҙарыбыҙ ҙа беҙҙең бергә үрелеп бара, бер-береһен тулыландыра, камиллаштыра. Уларҙа ғаиләбеҙҙең эске донъяһын да, күңел талпыныштарын да күрергә мөмкин.

**Шулай итеп, күктәр инселәгән икенсе яртыһын тапҡандар ғына бәхетле була тигәйнек. Эйе, бәхетле була, әгәр ҙә үҙе эргәһендәге бөтә нәмә бер тулҡында һәм хәрәкәттә булһа. Гөлсәсәк һәм Заһир Шәһәрғазиндарҙыҡы кеүек...**

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ӘСЕ ХӘҠИҠӘТ

# ӨЙЛӘНЕР ИНЕМ...

## әсәй ҡорған кәртә емергеһеҙ

**(Буйҙаҡ монологы)**

**Рәсәйҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда тыуымды арттырыуға, демографияны яҡшыртыуға йүнәлтелгән өҫтәмә саралар ҡабул ителеп тора. Әле яңы ғына икенсе, өсөнсө бала тыуғандан һуң бирелгән Әсәлек капиталын ҙур яңылыҡ итеп ҡабул иткәйнек. Хәҙер унан тыш әллә нисәмә төр түләүҙәр бирелә. Әммә хәл илдә лә, республикала ла маҡтанырлыҡ түгел. Ғаиләләр, бигерәк тә яңы өйләнешкәндәр бала табырға ашҡынып тормай. Быны Башҡортостанда тәүге бала тыуыу күренеше кәмеүе лә иҫбатлай. Уның ҡарауы, өсөнсө һәм артабанғы балалар донъяға килеүе артҡан. Әммә быға ҡыуанырғамы, әллә юҡмы? Бала табыу йәше үтеп барған ҡатындарҙан тыуған балалар өсөн дә һөйөнмәйем мин. Һан артынан ҡыуып, сифат хаҡында онотторға ярамай. Был, әлбиттә, минең шәхси фекер.**



Күп балалар тыумай ҡалыуында шулай уҡ айырылышыуҙар ҙа ҙур роль уйнай. Бер бала менән айырылһалар, башҡаға өйләнгән йәки кейәүгә сыҡҡан осраҡта ла күптәр икенсегә әсәй-атай булырға теләмәй. Шуға күрә, демографияны күтәреү, тыуымды арттырыу өсөн йәмғиәттә бөтә системаны үҙгәртеп ҡороу кәрәк. Бәләкәй саҡтан уҡ ҡыҙҙарҙы һәм улдарҙы "Һин буласаҡ әсәй йәки буласаҡ атай", тип тәрбиәләү мөһим.

Йәштәр ваҡытында өйләнһен, ғаилә ҡорһон өсөн дәүләт кимәлендә өҫтәмә саралар ҡабул ителмәй тороп, ныҡлы нигеҙле ғаилә ҡороп та, һау-сәләмәт балалар табып та булмаясаҡ, минеңсә. Быны мин үҙ тормош тәжрибәмдән сығып әйтәм. Беҙ өс дуҫ үҫтек, йәш араларыбыҙ икешәр йәш булһа ла, уны һиҙмәнек. Тағы бер айырма бар - өсөбөҙ өс милләттән. Мин- башҡортмон, Александр- урыҫ, Әнүр- татар милләтенән. Үҫмер саҡта, бөтәһе кеүек үк, киләсәккә пландар ҡорҙоҡ. Өйләнеп, күп итеп балалар үҫтереү тураһында ла хыялландыҡ. Әммә йәшлек йүләрлеге менәнме, бер-беребеҙгә биргән һүҙебеҙ ҙә бар ине: өсөбөҙгә бергә йөҙ йәш тулмайынса, өйләнеү тураһында ауыҙ асырға тейеш түгелбеҙ! Шулай итеп, өсөбөҙгә бергә 100 йәш тулғанда миңә утыҙ өс йәш ине, Саша күптән утыҙ биш йәшлек юбилейын билдәләгәйне, ә Әнүр утыҙ берен тултырғайны. Йәш саҡта ҡуйған шартыбыҙ үтәлһә лә, артабан да буйҙаҡ тормоштан ҡотолорға бер кем дә ашыҡманы.

Бында мәсьәләнең тағы бер яғы бар ине - өсөбөҙ ҙә атай-әсәйҙәр менән йәшәйбеҙ, йәғни, өйләнеп, кәләш алып ҡайтыр өсөн үҙ ҡыйығыбыҙ юҡ. Александрҙың ҡала ситендә апаһы менән уртаҡ шәхси йорто бар ине. Дуҫыбыҙҙың бөгөнгәсә тиклем буйҙаҡ йөрөүендә ошо туғаны ғәйепле, тип иҫәпләйем. Иптәшебеҙ күрше ҡаланан һөйгән ҡыҙын алып ҡайтҡас, егеттең апаһы уны ата йортона индермәүгә бөтә көсөн һалды. Ситтән килгән ҡатын был өйгә хужа булыр ҙа, уға үҙенә урын бурлмаҫ, тип ҡурҡты. Был мәкерле уйын ата-әсәһе аңына ла һеңдерҙе һәм маҡсатына иреште. Дуҫыбыҙ ошо ваҡиғанан һуң өйләнеү тураһында башҡа һүҙ күтәрмәне. Уларҙың атаһы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны, гүр эйәһе булғас, әсәләре әллә ни оҙаҡ йәшәмәне. Ә йорт өсөн низағ һаман бара әле. Быйыл етмеш йәшлек юбилейын билдәләгән Саша уны ремонтларға уйламай, сөнки апаһы менән бер нисә тапҡыр судлашты, уның ҡарары ҡасандыр өлкән туғаны файҙаһына булырына ышана ул. Был хаҡта һүҙ күтәрһәк, йорт минең ғүмергә етәсәк әле, ти ҙә ҡуя.

Мин үҙем дә шундайыраҡ хәлде үткәрҙем. Теге үҙебеҙгә үҙебеҙ һалған табу - өсөбөҙгә бергә йөҙ йәш тулғанда йәмғиәттә рухи ҡиммәттәр үҙгәреп тора ине. Ҡыҙҙар асыҡтан-асыҡ тәмәке тарта, енси мөнәсәбәттәр бәйһеҙләнде - бында инде әҙәпле кәләш һайлау ҡырҡа ауырлашты. Мин эшләгән һөнәрселек училищеһына йомош менән күрше мәктәптең хеҙмәт уҡытыусыһы килә торғайны. Дуҫлашып киттек. Йәш ҡатын әсәһе, алты йәшлек улы менән йәшәй ине. Атайым мин бәләкәй саҡта уҡ вафат булған, шуға күрә беҙ ҙә әсәй менән икәү. Теге ҡатын менән осраша башланыҡ. Улы мине яҡын күреп "атай" ти башланы. Бер аҙҙан өйләнешергә булдыҡ. Был хаҡта әсәйемә өндәшкәйнем. Уның балалы ҡатын икәнен ишетеү менән ҡыҙып китте. "Үҙең бала булдырырға һәләтһеҙме әллә, ниңә ят кеше балаһын ҡарарға тейеш, фәлән дә фәсмәтән..." - әйтмәгән һүҙе ҡалманы. Мин, әсәй һүҙенән сыҡмаған яҡшы ул, өйләнеү тигән уйҙан төңөлдөм һәм әсәй иҫән саҡта был теманы башҡа күтәрмәнем...

Хәҙер ул үлгәнгә лә ун йылдан ашыу ваҡыт уҙып китте. Мине атай тип йөрөгән малай ҙа үҫеп етте, бөгөн үҙенең балалары үҫеп килә. Ә мине унан башҡа ошо күңелгә яҡын "атай" тигән һүҙҙе әйтеүсе булманы. Ғаиләлә мин бер генә бала инем, әсәй ҡаршы төшкәс, шулай итеп, өйләнмәнем, өйләнһәм, балабыҙ булһа, мин атай ғына түгел, әсәйем дә өләсәй булыр ине. Ә былай, үҙенең тар ҡарашлы, тар күңеллеге арҡаһында, "өләсәй" һүҙен дә ишетмәй донъя ҡуйҙы. Ауыр тупрағы еңел булһын!

Хәҙер иң кесе дуҫыбыҙ ҙа алтмыш алты йәшен күптән тултырҙы. Әйткәндәй, уҙған йыл өсөбөҙгә бергә ике йөҙ йәш булды. Ул да ғүмер буйы ата-әсәһен ҡараны. Әнүрҙең ике ир туғаны бар ине. Икеһе лә юғары белемле, икешәр бала үҫтерәләр. Иптәшебеҙ, беҙҙән айырмалы, бер ҡасан да өйләнеп ҡараманы һәм быны эшләргә маташманы ла шикелле. Ул беҙҙән айырмалы бик ҡыйыуһыҙ егет ине, ҡыҙҙар кеүек оялсан булды. Йөрөгән ҡыҙын өйгә алып ҡайтһа, туғандары ни әйтер, тип ҡурҡа торғайны.

Бына шулай. Атай-әсәйҙе тыңлайыҡ, туғандарға ярайыҡ тип, ғүмерлеккә буйҙаҡ ҡалдыҡ. Әлбиттә, ғәйеп яҡындарыбыҙҙа ғына түгел, үҙебеҙҙә лә бар. Әммә... шуныһына иғтибар иттем: буйҙаҡ йәшәүебеҙгә беребеҙ ҙә үкенмәй ҙә шикелле. Яҡындарым, таныштарым араһында төн йоҡоһон йоҡламай үҫтергән ул-ҡыҙҙары менән аралашмай, ярҙам кәрәкһә генә балалары үҙҙәре хаҡында иҫкә төшөргәнен күрһәм, ишетһәм, үҙемде хатта ундайҙарҙан күпкә бәхетле итеп тойғаным бар...

**Буйҙаҡ монологын**
**Ләйсән СӘЛИХОВА**
**яҙып алды.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ



# КҮРКӘМ ҒӘҘӘТТӘР...

## йәштәрҙе бигерәк тә биҙәй

Йәшлек - ғүмерҙең иң гүзәл сағы. Һәр кеше уны матур һәм файҙалы үткәрергә бурыслы. Ислам дinendә йәштәр тәрбиәһенә ҙур иғтибар бирелә. Һәр кеше үҙе хаҡында ғына түгел, ә ғаиләләге башҡа ағзаларҙың тәрбиәһе тураһында ла уйларға, уларҙы матди яҡтан тәьмин итеү менән генә сикләнмәйенсә, иманлы, динле булыуҙарын да ҡайғыртырға бурыслы. Бөйөкбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм йәштәр тәрбиәһенә һәр саҡ ҙур әһәмиәт биргән. Мәҫәлән, хәҙрәти Ғәли, Зәйед бин Харис, Талха, Ғабдрахман ибн Ғәүф бөйөкбәребеҙ янында хеҙмәт ҡылған ваҡыттарында йәш егеттәр булғандар.

Тарихтан күренеүенсә, үткәнен онотҡан халыҡ рухи яҡтан тоторокһоҙлана, аҫҡа тәгәрәй башлай, бөтөүгә табан юл тота. Йәштәр - илдең киләсәге. Уларҙың ғәҙел, намыҫлы, рухи яҡтан һау-сәләмәт, иманлы, әҙәпле һәм әхлаҡлы булып тәрбиәләнеүе киләсәккә ышаныслы атларға ярҙам итә. Ата-әсәләр балаларына донъя һәм әхирәт һабаҡтары бирергә бурыслы.

Хакимдар балаларын тәрбиәләүҙе дүрт йүнәлешкә бүлгән:

**Иман тәрбиәһе.** Яратыусыны таныту, хәләл менән харамды айырыу һәм ул ҡағиҙәләр буйынса йәшәргә өйрәтеү.

**Холоҡ тәрбиәһе.** Гүзәл әхлаҡлы вә күркәм әҙәпле итеп тәрбиәләү.

**Бәҙән тәрбиәһе.** Был йәһәттән балаларға хас төрлө уйындар, йүгереү, көрәш кеүек спорт күнекмәләре мөһим урынды алып тора.

**Аҡыл тәрбиәһе.** Ата-әсә вә тәрбиә эше менән шөғөлләнеүсе кешеләрҙең балаларға файҙалы ғилемдәрҙе, йәмғиәт өсөн кәрәкле булған һөнәрҙәрҙе өйрәтеүе мөһим. Был турала Ҡөрьән-сөннәттә күп күрһәтмәләр бар. Хәҙрәти Ғәли: "Балаларығыҙға замана ғилемен өйрәтегеҙ, сөнки улар ошо заман өсөн яратылған", - тигән.

Ғибрәт һәм өлгө алырлыҡ шәхестәребеҙ етерлек. Көнбайыш мәҙәниәтенең беҙҙең тормошҡа кире йоғонтоһо көндән-көн көсәйә. Йәштәрҙе бары тик дини һәм милли тәрбиә ярҙамында ғына ошо афәттән һаҡлап ҡала алабыҙ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуңғы ваҡытта диндар булып ҡыланып, мосолмандар араһындағы берҙәмлекте, татыулыҡты, ышанысты бөтөрөү, үҙ-ара төркөмдәргә айырыу күренештәре осрай. Бөйөкбәребеҙ Мөхәммәт (с.ғ.ү.) әйткән: "Ахырызаманда бер ҡәүем килер, үҙҙәре йәшел, аҡылдары зәғиф булып, Аллаһтың ҡәләме вә Рәсүлулланың һүҙҙәрен һөйләрҙәр. Уларҙың иманы тамаҡтарынан ары үтмәй. Уҡ нисек йәйәнән тиҙлек менән атылып сыға, улар ҙа диндән шулай тиҙ генә сығып китәләр" (Бохари).

Ислам дине һәр ваҡыт берҙәмлекте һәм татыулыҡты талап итә. Йәштәрҙе берҙәм булырға, тура юлға өндәргә һәр кем бурыслы. Улар - беҙҙең киләсәк. Динебеҙ һәм тыуған илебеҙ үҫешенә өлөш индереүселәр.

**Илдус МОСТАФИН.**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

**Һәр халыҡтың тыйыуҙары, һынамыш-юрамыштары бар. Улар хатта совет заманында ла, дөрөҫөрәге, дин инҡар ителеп, атеизм сәскә атҡан ваҡытта ла юҡҡа сыҡманы һәм быуындан-быуынға тапшырылып килде. Шулай булмаһа, һәр милләттең, ауылдың, хатта ғаиләнең үҙенә генә хас ышаныуҙары булмаҫ ине, тип уйлайым.**

# ҺЕҘҘЕ НИМӘНӘН ТЫЙҘЫЛАР?



Беҙ бәләкәй саҡта өлкәндәр һепертке, көйәнтә аша атлап сығыуҙы тыйҙы. "Үҫмәй ҡалаһығыҙ", тиерҙәр ине. Хәҙер уйлайым, уның беҙҙең буйға бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы булмаған, ә ябай тәрбиә алымы ғына булған, йәғни беҙгә һепертекене лә, көйәнтәне лә урынына ҡуйырға, аяҡ аҫтына һалмаҫҡа кәрәклекте генә күндергәндәр.

Ултырғыста, урындыҡта аяҡ һелкеп ултырғанды әсәй яратмай торғайны. "Ен балаһын бәүетеп ултырмағыҙ", тип киҫәтте. Әнер төшкәндә урамда сыр-сыу килеп йөрөүҙе лә тыйҙы. "Ен һуға", тип ҡурҡытты. Иртән торғас та урынды йыйыштырмаһаң да, ен аунатып ятҡырып, тип әрләгәне әле һаман хәтерҙә. Ә ендән беҙ ҡурҡтыҡ. Бер ҡасан да күргәнебеҙ булмаһа ла.

Эт, бесәй ярау иткәндә ҡарарға ла ярамай ине беҙгә. "Күҙегеҙгә арпа сығыр", тинеләр. Ә яңылыш ҡына күреп ҡалһаҡ, өс тапҡыр "тьфукрист, тьфукрист, тьфукрист" тип әйтә торғайныҡ. Ологайғас ҡына был һүҙҙең нимә аңлатҡанын төшөндөм. "Тьфукрист" тимәгәнбеҙ беҙ, ә "тьфу крест" тигәнбеҙ. Үҙебеҙсә шулай уҡынып-суҡынған булдыҡмы икән?

Хәҙер уйлайым да, юҡ, ендән генә ҡурҡмағанбыҙ икән беҙ. Совет осоро булһа ла, Алланан да, тамуҡтан да ҡурҡҡанбыҙ. Утҡа төкөрһәң, "теге донъяла" эҫе таба ялаталар, икмәк вағын, ашамлыҡты тапаһаң, Алла башыңа һуға, тип өйрәтеләр. Быларҙың барыһы ла үҙенә күрә тәрбиә алымдары ғына булған да баһа!

Ә балалар араһында ғына булған күпме һынамыштар бар ине. Тегене эшләмә, юғиһә, әсәйең үлә, быны эшләмә - әсәйең үлер. Иң ҡурҡыныс шул булғандыр инде ышаныусан бала күңеле өсөн.

Мунса менән бәйле тыйыуҙар ҙа бик күп беҙҙең халыҡта. Ишегенән ингәндә өс тапҡыр тамаҡ ҡырып инергә кәрәклеген, мунсала һыу эсергә, һыулы бакты асыҡ ҡалдырырға ярамағанлығын үҙебеҙҙән балаларға, ейәндәргә лә һеҙҙерҙек инде хәҙер.

Эсергә, ашарға ярамағанлығы аңлашыла инде, йыуыныу, таҙарыныу урыны - иң бысраҡ урын, тип әйтәләр. Ә бына тамаҡ ҡырып инеү тигәне, моғайын, мунса эйәһен иҫкәртеү һымаҡ булалыр инде. Ә, бәлки, үҙеңдән алдан барып йыуынып ултырған кешене ҡурҡытмаҫ йәки үҙең ҡурҡмаҫ өсөн ҡабул ителгән тәртип ҡағиҙәһе генәлер. Башҡа халыҡтарҙа мунса хужаһы иң насары тип уҡығаным бар. "Мунса урынына йорт һалырға ярамай, йәҙәрләгән йыл унда ендәр эйәләшә", тигән тыйыу ҙа шунан килеп сыҡҡандыр, бәлки.

Көҙгө, тупһа, тәҙрә менән бәйле тыйыуҙар ҙа күп беҙҙең башҡорт халҡында. Мәҫәлән, ололар тупһаға ултырырға, баҫырға ярамай, ти торғайны. Үҙенә ярлылыҡ теләйһең, тип аңлата инеләр беҙгә. Шуны һынағаным бар: күптәр тупһаны аша атлап сыға, баҫырға тырышмай. Әйбер биргәндә-алғанда ла йә сығып, йә инеп алалар. Иғтибар итһәгеҙ, тупһа аша күрешмәйбеҙ ҙә, ҡосаҡлашмайбыҙ ҙа, шулай бит. Тимәк, был ышаныуҙарҙың барыһы ла беҙҙең генетик хәтеребеҙҙә һаҡлана. Тупһала өй эйәһе генә ултыра, унын урынын биләһәң, ул һинә хәйерселек килтерә,тигән ырым башҡа халыҡтарҙа ла бар.

Был тыйыуҙар, һынамыштар, ҡурҡытыуҙар буш урында ғына килеп сыҡмағандыр инде. Боронғо кешеләрҙең оҙаҡ ваҡыт тирә-яҡ мөхитте, тәбиғәтте, уратып алған донъяны, кешеләрҙең тәртибен, һаулығын күҙәткәндән, өйрәнгәндән һуң барлыҡҡа килгәндер. Артабан йәмғиәттә әхлаҡи нормалар булдырыу өсөн ҡабул ителгән булғандыр ҙа, оҙайлы эволюция осоронда, үрҙә әйтеп үтелгәнсә, ҡан хәтерендә ҡалғандыр.

Ә һеҙҙең төбәктә, ғаиләлә ниндәй тыйыуҙар, юрамыштар, тыйыуҙар була торғайны һәм улар нисек аңлатыла ине?

**Мерәүәрт ӘҺЛИУЛЛИНА.**

ҺАБАҠТАР

# ИР-ЕГЕТТЕ НИМӘ ҮЛТЕРӘ?



Үҙенең ғаилә тормошонан арыған йәш ҡатын ирен үлтерергә була. Иртән әсәһе янына килә лә:

- Әсәй, иремдән арыным. Башҡаса уның ахмаҡ ҡылыҡтарына түҙер әмәлем ҡалманы. Уны "теге донъя"ға оҙатырға булдым, тик уның өсөн яза биреүҙәренән ҡурҡам. Һин миңә ярҙам итә алмаҫһыңмы икән? - тигән.

Әсәһе:

- Ярай, ҡыҙым, ярҙам итермен. Тик бының өсөн бик мөһим булмаған бер нисә эште үтәргә кәрәк булыр, - тигән.

- Ниндәй эш ҡушһаң да эшләйем, - тип ризалашҡан ҡыҙы.

- Уның үлемендә һине ғәйепләмәһендәр өсөн, иң беренсе, ирең менән дуҫлашырға кәрәк. Икенсенән, йәш һәм матур булып күренергә, үҙеңде ҡарарға тырыш. Өсөнсөнән, уны хәстәрлә, яҡшы булып күрен, рәхмәтле бул. Дүртенсенән, түҙемлегеңде, яратыуыңды, көнләшмәүеңде, уны тыңлауыңды күрһәт. Бишенсенән, үҙеңдең мөләкәтеңде дөйөм мәнфәғәттә тотонорға һаранланма, ул һинә аҡса бирмәһә, асыуланма. Алтынсынан, тауышыңды күтәрмә, киреһенсә, уның үлеменән һуң һинә шик төшмәһен өсөн ғаиләлә татыулыҡ, берҙәмлек хисе булдыр. Ошоларҙы үтәй алырһыңмы? - тип һораған әсәһе.

- Эйе, әлбиттә, - тигән ҡыҙы.

- Ярай. Бына ошо онтаҡты яйлап ҡына ашына һалырһың, ағыу уны яйлап ҡына үлтерер, - тигән.

Бер айҙан һуң йәш ҡатын тағы әсәһе янына килгән:

- Әсәй, мин иремде үлтермәҫкә булдым. Уны мин элеккесә ярата башланым. Ул тулыһынса үҙгәрҙе, миңә ҡарата хәстәрле, иғтибарлы була башланы. Хәҙер ни эшләргә? Ағыуҙың йоғонтоһонан уны нисек һаҡларға? Зинһар, ярҙам ит! - тип үтенгән.

- Борсолма, ҡыҙым. Мин һинә ағыу түгел, ә куркума бирҙем. Дөрөҫөн әйткәндә, иреңә һин үҙең ағыу булдың. Уны ярата, хөрмәт итә башлағас ҡына уның яҡшы яҡҡа үҙгәреүен күрҙең. Ир-егет, ысынында, насар түгел ул. Беҙ үҙебеҙ ирҙәргә ниндәй мөғәмәләлә булһаҡ, улар ҙа беҙгә шундай мөнәсәбәт күрһәтә, - тигән әсәһе.

***✓ Тик бер нәмә генә билдәһеҙ ҡалды - дошмандың нимә эшләре күҙалланмағайны. Кутузов был ниәткә ҡәтғи ҡаршы сыҡты. Хәҙер һуғышырға ярамай. Төп көстәрҙең килеп еткәнен көтөргә кәрәк, тине ул.***



## Икәүме ни Рәсәй

Рәсәйҙә яңы хаким барлыҡҡа килгәне тураһында алдараҡ яҙа-йоҙа булһа ла әйтеп үткәйнек инде. 1801 йылда марттың 11-нән 12-нә ҡарата төндә Павел Беренсе император үлтерелгәс, уның урынына өлкән улы Александр Беренсе император булып таж кейгән саҡта, уға 24 йәш була. Ең һыҙғанып емертеп эшләй торған саҡ. Александр бала сағында күберәк өләсәһе Екатерина Икенсе янында йәшәй. Царское Селола һәр саҡ тиерлек бергә булалар. Екатерина ейәнен алдынғы ҡарашлы, ныҡ белемле, тәрбиәле итеп үҫтерергә тырыша. Александр 16 йәшендә өйләнә, шунан хәрби хеҙмәткә китә, бер йыл тиерлек унда йөрөгәс, полковник дәрәжәһе алып ҡайта. Аҙ ғына ял итә лә өйҙә, хеҙмәткә кире китә. Атаһы Павел менән борсаҡтары бешмәй. Павел ҡыҙматаҙ кеше. Юҡ-барға ғына ҡыҙып китә лә, донъя ҡыйратырға тотона, янындағы кешеләргә әйтмәгән һүҙе ҡалмай. Дөрөҫ, был хәленән тиҙ һыуына, кемдәргә ҡул күтәргән, рәнйеткән, уларҙан ғәфү үтенә. Ошо холҡо арҡаһында улы Александр менән араһы йүнле булмай. Өләсәһе улынан йүнле батша сыҡмаҫын белә, ә Александр донъя кимәлендәге император булыр, тип өмөтләнә. Ошо ниәт йәш ирҙең мейеһенә инеп ултыра. Әммә атаһы әле ныҡ, бирешергә, урынды бушатырға йыйынмай. Александрҙы уратып алған кешеләр ҙә был турала йыш ҡына тегенең "тирмәненә һыу ҡоя". Бигерәк тә Англияның Петербургтағы илсеһе Александрҙың ҡолағына шыбырларға ярата. Бер көндө ул атаһы Павелде үлтерергә йыйыныуҙары тураһында әйтә. Александр аптырап ҡарай ҙа, бер ни ҙә өндәшмәй. Шул уҡ ваҡытта кеше ғүмеренә яҫҡыныуҙы маҡтап та, хурлап та бер ни ҙә эшләмәй. Икенсе төрлө әйтһәң, атаһын үлтереүҙә ниндәйҙер дәрәжәлә улы ла ҡатнашҡан булып сыға.

Нисек кенә булмаһын, 12 мартта Александр Рәсәй императоры тажын кейә һәм халыҡ-ара хәлдәрҙе үҙ файҙаһына бороу өсөн беренсе килешеүҙәренең береһе Франция империяһы менән була.

* * *

Бонапарт императорға үҙенекеләргә лә, бигерәк тә сит илдәргә, айырыуса Англияға, императорҙың кемлеген танытырға кәрәк. Нисек итеп? Әлбиттә, уның юлы бер - һуғышта бик әһәмиәтле еңеү яуларға, ҡаршы яҡ ҡабаттан башын ҡуҙғалта алмаҫлыҡ итеп тондорорға кәрәк. Шул саҡта Бонапарттың һүҙен һүҙ итер барыһы ла.

Франция Ла-Манш ҡултығының Англия яғында еңеүле яуҙар булдырыр өсөн бығаса күрелмәгән флотилия төҙөүҙе ашыҡтырҙы. Шул уҡ ваҡытта Наполеон һуғыштың диңгеҙҙә түгел, ерҙә булыу ихтималлығын уйлап, яуҙы нисек алып барырға икәнлеген билдәләне. Ҙур, бик ҙур һуғыш булырға тейеш ине йә ерҙә, йә һыуҙа.




1805 йылдың августа һуғыш менән етәкселек итер өсөн Бонапарт Булонға барып етә. Инглиздарҙы, Ла-Манш аша сығып, үҙҙәренең йортонда ҡыйратыр өсөн барыһы ла әҙер буғай. Бик ҙур флотилия төҙөлгән. Гибралтар боғаҙы аша французларҙың испандар менән ҡуша берләштергән эскадраһы килеп етһә, бер ваҡытта ла бер илдә лә булмаған флотилия барлыҡҡа киләсәк. Шул килеү менән Англияға һөжүмде башламаҡсы була Бонапарт. Ул бер көн көтә, ике, өс... Эскадраның бында булырға тейешлегенә ун көндән ашыу ваҡыт үткәс, Наполеон бик яман хәл булғанын аңлай. Оҙаҡламай уның күрәҙәлеге дөрөҫләнә. Көнбайыштағы эскадра урынынан да ҡуҙғала алмаған. Урта диңгеҙҙәге инглиз караптары уны ҡамап алып, һыуға батырып бөтөргән тиерлек.

Яуҙы асмайынса уңышһыҙлыҡҡа осраған Бонапарт тәүҙә аптырап ҡала. Бынан бер йыл элек император тажы кейгәйне, әммә йыл буйына күҙгә элерлек бер генә еңеү ҙә, хатта уңыш та күргәне булманы. Шулай уҡ дарманһыҙмы икән ни Бонапарт?

Өҫтәүенә уға ҡаршы илдәр берлеге төҙөлөп бөткән тиерлек. Англия, Рәсәй, Австрия, Швеция, Неопалитан короллеге берләшкән, ошо арала уларға Пруссия ҡушылмаҡсы була. Бындай килешеү бер ваҡытта ла булғаны юҡ ине. Әгәр уларҙың ғәскәрен бергә туплаһаң, ярты миллионға яҡын һалдат була. Берекмәнең эсендәге иң йәш монарх Александр Беренсе: беҙ Францияға һәм французларға ҡаршы һуғышырға йыйынмайбыҙ, беҙ бары Бонапартҡа ғына ҡаршыбыҙ, тигән саҡырыу яңғырата. Барыһы ла ризалаша уның менән һәм берекмәнең ғәскәрен көнбайышҡа - Франция сигенә ҡыуа.

Яңы берекмәнең барлыҡҡа килеүе, бигерәк тә яңыраҡ ҡына ҡыуана-ҡыуана Франция менән килешеү төҙөгән Александрҙы аңламай Бонапарт. Был ниндәй ике йөҙлөлөк һуң ул, тип аптырай. Кеше үҙен ир итеп һанаһа, исмаһам, беренсе килешеүҙе юҡҡа сығарырға, шунан икенсеһенә ҡул ҡуйырға тейеш ине. Ә был икеһен дә дөрөҫкә һанай шикелле.

Берекмә Бонапартҡа ҡаршы эш башлай. Әммә Бонапарт өлгөрөрәк булып сыға. 1805 йылдың сентябрендә "бөйөк әрме" (Францияның әрмеһен рәсми рәүештә шулай тип йөрөтәләр) Рейнды аша сығып, Германия еренә бәреп инә. Дөрөҫ берләшкән илдәрҙең ғәскәре Бонапарттыҡына ҡарағанда һан яғынан да күберәк, сифат яғынан да яҡшыраҡ. Булһын, тип уйлай Бонапарт. Һан яғынан өҫтөнлөктө хәрәкәт тиҙлеге менә еңеп булғанын аҙ күрҙеме ни ул. Иң мөһиме, берекмәнең көсөн тарҡатып алырға һәм берәмтекләп, ҡыйратырға. Йоҙроҡҡа төйөлгән ҡулды еңеү еңел түгел, ә бармаҡтарҙы айырып алһаң, берәмләп һындырып сығып була.

Был мәлдә Австрия әрмеһе бер урынға тупланмаҡсы булып маташа, шул уҡ авҡытта көнсығыштан Кутузов етәкселегендә килгән Рәсәй, яҡында тупланған Пруссия көстәрен көтә. Бонапарт тиҙ генә Австрия ҡоралды көстәренә һөжүм итә һәм уны Ульм ҡалаһына инеп бикләнергә мәжбүр итә һәм быны шунда бөтөн яҡтан да ҡамап ала.

1805 йылдың 20 октябрендә Австрия әрмеһе бирелергә мәжбүр була. Егерме мең һалдат әсиргә төшә, бик күп туп, башҡа ҡорал французларға күсә. Был еңеү йәшен тиҙлегендә бөтөн Европаға тарала. Бонапарт еңеүҙе байрам итеп тормай, Венаға ҡарай ҡуҙғала. Дунай йылғаһын аша сығырға элек төҙөлгән күпер бар. Әммә уны австрия ғәскәренең бик ышаныслы бер өлөшө һаҡлай. Уларға, сигенгән саҡта күперҙе шартлатып китергә, тигән әмер бирелгән. Французлар башҡа һыймаҫлыҡ аҙымға бара. Өс генерал бер ҡоралһыҙ, ҡарауылһыҙ көйгә күпергә яҡын киләләр. Үҙҙәрен парламентарийҙар тип таныштыралар, уларға әрменең баш командующийы менән күрешеп һөйләшергә кәрәк. Солох тураһында, имеш, килешеү төҙөлгән. Шул турала һөйләшергә кәрәк. Австриясылар ышана һәм кенәз Ауэрсперг янына алып баралар. Был өсәү тегене матур хәбәр менән оҙаҡ әүрәтә. Бер нисә сәғәттән ҡараһа ул, француз ғәскәре шым ғына килеп, күперҙе аша сығып та бөткән. Ә Бонапарт еңел генә итеп Вена ҡалаһын баҫып ала.

Әрме штабына килгән Александр 1 менән Австрия императоры Франц осрашып һөйләшәләр һәм икеһенең береһе лә һуғыш еңелеү менән тамамланды, тип һанамай. Рәсәйҙең төп көсө әле килеп етмәгән, Австрияның да ғәскәре ҡалған әле. Күңел күтәренкелегенә Европаның көньяғындағы Транфальгар мороно янында инглиз диңгеҙ көстәренең француз менән испан караптарын ныҡ ҡыйратыуы тураһындағы хәбәр ҙә йоғонто яһай. Тимәк, французлар диңгеҙ көсөн юғалтты тигән һүҙ. Ламаншты аша сығып Англияны баҫып алыу тормошҡа ашмаҫ хыял ғына булып ҡалды.

Ул арала Рәсәй көстәре, бында килеп етеп, Дунайҙың икенсе ярына урынлаша. Башкомандующий Михаил Кутузов ғәскәрҙең нығыныуын, ял итеүен һәм төп көстөң килеп етеүен теләй. Әлегә яуға инмәйенсә бөтөн көстөң дә килеүенә өлгәшергә һәм һәр яҡлап әҙерләнеп бөткәс кенә дошмандың башына бер юлы һуғырға кәрәк, тип һанай. Йәш император Александр 1, уның ярандары өтөп-ҡырып баралар. Көтөргә ярамай, дошман көсһөҙ саҡта бәреп ҡалырға кәрәк, тиҙәр. Ә дошман көсһөҙ тигән хәбәрҙе Бонапарт үҙе юрый тарата. Ул ғына ла аҙ. Бер көндө ул Савари исемле генералын Александр 1 ҡашына ебәрә. Савари император менән осрашып, Бонапарт солох һорай, тип белдерә. Александр быға яуап итеп, Савариға эйәртеп, Долгоруков тигән егерме һигеҙ йәшлек генералын ебәрә. Бонапарт Долгоруковты түбәнселек менән ҡаршы ала, иплəп кенә һөйләшә, хатта оялсан булып та ҡылана. Ни тиһәң инде, оҫта әртис бит Наполеон. Тегенеһе Бонапартты көсһөҙ, ҡыйыуһыҙ бәндә икән, тип ҡабул итә. Минең императором һеҙҙең солох үтенесегеҙгә ризалыҡ бирә, тип яуаплай. Ниндәй шарттар ҡуя һуң Александр- тигән һорауға: һеҙ Францияның элекке сиктәренә ҡайтырға тейешһегеҙ, тип ебәрә. Долгоруков үҙ яғына әйләнгәс, императорына һөләшеү һөҙөмтәләрен әйтеп биргәс, Бонапарт үҙенең ҡоралды көстәренә ышанмай, тип һығымта яһай. Хәрби совет йыялар. Унда Рәсәй һәм Австрия императорҙары, Ктузов һәм генералдар ҡатнаша. Австрияның хәрби штабынан Вейротер бик ентекләп буласаҡ оло яуҙың хәрәкәттәрен күрһәтә. Ниндәй хәрби берәмектең ҡасан ҡайҙа ҡайһылай барырға тейешлеге - бөтөнөһө лә иҫәпкә алынғайны. Тик бер нәмә генә билдәһеҙ ҡалды - дошмандың нимә эшләре күҙалланмағайны. Кутузов был ниәткә ҡәтғи ҡаршы сыҡты. Хәҙер һуғышырға ярамай. Төп көстәрҙең килеп еткәнен көтөргә кәрәк, тине ул. Император Александр 1 һәм йәш генералдар Кутузовҡа көлөп кенә ҡараны, ҡарттың фекере иҫкергән, яңы шарттарҙы иҫәпкә алмай. Французларҙың хәле алама саҡта ныҡ итеп һуғып ҡалырға кәрәк.

Бонапарт был һуғышҡа бик ныҡ ҙерләнә. Ғәскәр берәмектәрен алға, артҡа йөрөтә, тегенеһен, быныһын , ҡоралдарын ҡат-ҡат әҙерләтә, кемдең ҡайҙа торасағын, нисек хәрәкәт итәсәген бөтөнөһөнә лә аңлата. Кистәрен ул һалдаттары араһында була. Ут янында ултыра, һалдаттарҙың ризығын уртаҡлаша, көләмәстәр һөйләй, шаярта, ғәскәрҙең күңелен күтәрергә тырыша. Ысынлап та ул күренгән ерҙә күңел күтәренкелеге була, кешеләр еңәсәктәренә ныҡ ышана.

Бына декабрь төнө уҙып, таң ата башлай. Австро-урыҫ әрмеһе хәрәкәткә килә һәм дошманына ҡаршы ҡуҙғала.

Берләштерелгән ғәскәрҙең төп көстәре килеп етмәһә лә, уларҙың барыбер французларҙан күберәк икәнлеген Наполеон белә. Уның етмеш өс мең кешеһенә ҡаршы һикһән биш мең кешелек әрме баҫҡан. Ун ике меңгә күберәк. Аҙ көс түгел. Әммә Наполеон күп һанлы ғәскәрҙе көтөлмәгән һөжүм, уйламаған хәрәкәт менән еңеү мөмкин икәнен белә.

Дошман яуға күтәрелә, французлар ҡатып ҡалған һымаҡ бер урында тора бирә. Ҡаршы яҡ, сигенгән кеше булып үҙ артынан французларҙың аҙ ғына көсөн эйәртеп алып китеүе була, Наполеон төп көсө менән дошманы урынлашҡан урындың ҡап уртаһына һөжүм башлай. Быны көтмәгән австро-урыҫтарҙың ғәскәре икегә бүленә. Французлар тәүҙә быларҙың һул яғын дөмбәҫләй, шунан уң өлөшөн. Дошманы ҡойолоп төшә. Шуны ғына көткән Наполеон ғәскәре быларҙы бөтөн яҡтан да ҡамай. Союздаштар әрмеһе бик тиҙ тарҡалә һәм еңелә. Кис етер алдынан яу туҡтай. Австро- урыҫтар егерме ете мең кешеһен үле, йә яралы килеш һуғыш яланында ташлап китә, ҡалғаны әсир төшә. Ике император аттарына менеп икеһе ике яҡҡа ҡаса.

**(Дауамы. Башы 31-32-се һандарҙа).**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАҢ ҺӘЛӘТЛЕМЕ?

■ Лондонда үткәрелгән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, баланың һүрәтенә ҡарап, уның үсмер саҡта интеллектуаль һәләтенең кимәле нисек буласағын билдәләп була. Британия психологтары 15 мең игеҙәкте тикшереп, ошондай һығымтаға килгән. 4 йәшлек саҡтарында улар кеше һүрәтен төшөрә. Ғалимдар балаларҙың ижадын 12 баллы система менән баһалай. Бынан тыш, балалар интеллект коэффициентына тест үтә. 10 йылдан һуң яңынан үткәрелгән тест һөрәттәр менән 14 йәштәге тест араһында бәйләнеш барлығын асыҡлай. Шулай ҙа ата-әсәләргә баланың һүрәтте насар төшөрөүенә көйәләнергә ярамай. Интеллектҡа күп кенә генетик һәм экологик факторҙар йоғонто яһай. Ә холоҡ үҫешенең нигеҙендә темперамент ята.

■ Швеция ғалимдары белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәҫәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән ҡан анализы ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100B матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алда телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе тҡымаһын юғалтыуға булышлыҡ итә.

■ Хәтерҙе, тиренең, сәстәрҙең торошон яҡшыртыу өсөн төрлө витаминдарҙы йыш ҡабул итәһегеҙме? Белгестәр билдәләүенсә, кеше витаминдарҙы аҙыҡ-түлек менән дә етерлек ала, шуға ла өҫтәмә рәүештә витаминдар эсеүҙең кәрәге лә юҡ. Гарвард медицина мәктәбе ғалимдары 120 мең кешенең ауырыу тарихын өйрәнгән. Тикшереү өсөн Е витаминын алғандар. Ғалимдар әйтеүенсә, был витаминды ҡулләп ҡулланыу баш мейеһе ҡан тамырҙарының зарарланыуына - инсультҡа килтереүе ихтимал. Ошондай уҡ тикшеренеүҙәр Швецияла ла үткән. Ул саҡта ғалимдар А витамининың артыҡ булыуы үпкә яман шешенә, Е витаминының инсультҡа килтереүе асыҡланған.

■ Тиҙ арала шлактарҙан таҙарыныրға тәҡдим итә беҙгә төрлө рекламалар. Ә бына рәсми медицина шлактар барлығын танымай. Ғәҙәттә, организмды таҙартыу тураһында һүҙ барғанда эсәктәрҙе таҙартыу күҙ уңында тотола. Йәнәһе, эсәктәрҙә лайла, таш йыйыла һәм улар үҙенән-үҙе сығарылмай, шуға ла таҙартыу саралары, мәҫәлән, клизма йәки дарыуҙар кәрәк. Монодиета организмды таҙартмай, әммә стресс тыуҙырып, матдәләр әйләнешен боҙоуы ихтимал. Заман медицинаһының бер ысулы ла, мәҫәлән, УЗИ йәки колоноскопия кеше тәнендә бер ҡурҡыныс таш та тапмай. Кеше организмы даими таҙарынып тора һәм тарҡалыу продукттары бер ҡасан да эсәктә оҙаҡ ятмай. Организмды таҙартыуҙың иң ябай ысулы - әүҙем тормош, дөрөҫ туҡланыу, һыуҙы күп эсеү.

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Республиканың юғары уҡыу йорттарына студенттар ҡабул итеү мөҙҙәте тамамлана. Башҡорт дәүләт университетының Сибай филиалында был эштәр нисек атҡарылған? Уҡыу йорто йәштәрҙе ниндәй йүнәлештәр, ниндәй проекттары менән үҙенә йәлеп иткән һәм башҡа ошондай һорауҙарҙы уҡыу йортоноң директоры Илдар ХӘМИТОВҡа төбәнек.**

# КӨНЬЯҠ УРАЛ ТӨБӘГЕНЕҢ...

## төп мәғариф үҙәге



➔ **Сибай институтының башҡа уҡыу йорттарында күҙәтелмәгән үҙенә генә хас данлы традициялары бар, уларҙы иҫкә төшөрөп үтәйек әле...**

- Эйе, Сибай институты Урал аръяғы халҡы өсөн юғары миссия үтәүсе уҡыу йорттарының береһе. Беҙҙең студенттарыбыҙҙың күбеһе Көньяҡ Урал районларынан йыйылған һәм уларҙың 90-92 проценты башҡорттар. Һәм, әлбиттә, аралашыу башлыса башҡорт телендә алып барыла. Икенсенән, уҡыу йортоноң тышҡы, эске биҙәлеше, халҡыбыҙҙың билдәле шәхестәренең бюстары һәм барельефтар тәрбиәүи маҡсатҡа йүнәлтелгән. Бынан тыш, беҙҙең бөтә факультеттарҙа ла студенттарҙың ниндәй йүнәлештә белем алыуына ҡарамаҫтан, башҡорт теле туған һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыла. Башҡорт теле республикабыҙҙа дәүләт теле булараҡ ҡабул ителгән, шуға ла ул дәүләт гербы, дәүләт флағы, гимн кеүек дәүләт ҡурсаулығында булырға тейеш тип иҫәпләйбеҙ. Был йәһәттән һуңғы ваҡытта телгә иғтибар артыуы һөйөндөрә. Шуға ла башҡорт телен туған тел булараҡ һаҡлау, киләсәк быуынға еткереү- ул һәр берebеҙҙең иненә һалынған ҙур бурыс. Был бурыс беҙҙең студенттар күңеленә ныҡлы һеңдерелә.

***Сираттағы йолабыҙ - ул уҡытыусы менән уҡыусының үҙ-ара йылы мөнәсәбәте. Беҙ һәр студенттың ҡайҙан килгәнен, ниндәй шарттарҙа йәшәгәнен, уның һәләтен, мөмкинлектәрен шәхсән беләбеҙ. Улар беҙҙең даими күҙәтеү аҫтында. Йәғни, студентҡа беҙ шәхес булараҡ ҡарайбыҙ һәм уҡыу йылы буйына уның күңелен үҫтерәбеҙ, формалаштырабыҙ, аҙаҡ бындай партнерҙарса булған мөнәсәбәт студент диплом алып, эшкә урынлашҡас та һөҙөмтәле дауам итә. Үҙҙәре уҡып сығып, инде балаларын ошо белем усағына алып килгәндәр байтаҡ беҙҙә.***

Рухи тәрбиә биреү эшмәкәрлегебеҙ уны этномәҙәни йүнәлештә ойоштороуҙан, студенттарға халҡыбыҙҙың матур йола һәм ғәҙәттәре нигеҙендә әхлаҡ ҡанундарын өйрәтеүҙең әһәмиәтенән сығып билдәләнгән. Шуға күрәлер ҙә, беҙҙең уҡыу йортона килеүселәр студенттарҙың алсаҡ, ихлас булыуына һәм кем генә булыуына ҡарамаҫтан, сәләмләп үтеүенә иғтибар итә. Был ысынлап та шулай, әлеге талап уҡыу башында уҡ һеңдерелә һәм ул студентты диплом алғансы оҙатып йөрөй.

Сираттағы йолабыҙ - ул уҡытыусы менән уҡыусының үҙ-ара йылы мөнәсәбәте. Беҙ һәр студенттың ҡайҙан килгәнен, ниндәй шарттарҙа йәшәгәнен, уның һәләтен, мөмкинлектәрен шәхсән беләбеҙ. Улар беҙҙең даими күҙәтеү аҫтында. Йәғни, студентҡа беҙ шәхес булараҡ ҡарайбыҙ һәм уҡыу йылы буйына уның күңелен үҫтерәбеҙ, формалаштырабыҙ, аҙаҡ бындай партнерҙарса булған мөнәсәбәт студент диплом алып, эшкә урынлашҡас та һөҙөмтәле дауам итә. Үҙҙәре уҡып сығып, инде балаларын ошо белем усағына алып килгәндәр байтаҡ беҙҙә. Тағы ла шуны әйтер инем, бөгөнгө көндә институттың уҡытыусылар коллективының төп өлөшөн элекке студенттарыбыҙ тәшкил итә. Йәғни күсәгилешлек һаҡлана. Мин үҙем дә ҡасандыр ошо институтты тамамлап, ошонда ҡанат нығытҡан, фән тауҙарын яулаған кешемен. Уҡыу йортоноң эшмәкәрлеге минә ят түгел, киреһенсә, бик яҡын. Йылдар үтһә лә беҙҙең маҡсатыбыҙ бер нисек тә үҙгәрмәне - ул илдең лайыҡлы граждандарын әҙерләү, шәхестәр үҫтереү.

Шулай итеп, ҡасандыр ҡаланың бер мәктәбе базаһында башланғыс алған уҡыу йортоноң бөгөн үҙ йөҙө, үҙ йүнәлештәре, күркәм йолалары бар. Әлбиттә, ҡаҙаныштар, уңыштар бер көн эсендә генә яуланмаған. Бында институтҡа бөтә белемен, оҫталығын, идеяларын һалған ғалимдарыбыҙҙың утыҙ йыллыҡ хеҙмәт тәжрибәһе ята. Беҙ быны яҡшы аңлайбыҙ һәм ошо матур традицияларҙы артабан да камиллаштырырға, үҫтерергә тырышабыҙ.

Мәғлүм булыуынса, теге йәки был уҡыу йортоноң баһаһын студенттар билдәләй, белем усағының төп хеҙмәт күрһәткесе - сығарылыш студенттарының квалификацияһына ярашлы эш урыны табыуы. Был юҡтан ға беҙгә йөҙ ҡыҙартырға тура килмәй, беҙҙә белем алған студенттар тормошта юғалып ҡалмай, һәр ерҙә үҙ урынын таба. Юғары белемле, тәртипле, тәрбиәле, көслө рухлы, кешелекле, кеселекле булған белгесте кем яратмаһын! Шуға ла Сибай институтын тамамлаған белгестәргә ихтыяж ҙур: улар Башҡортостанда ғына түгел, Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә, хатта сит илдәрҙә лә иҡтисад, сәнәғәт, мәғариф тармаҡтарында, дәүләт органдарында уңышлы хеҙмәт итә.

➔ **Эйе, һеҙҙең студенттарҙың тәртибе, үҙ-үҙен тотошо, белем алырға ынтылышы ла күптәрҙән айырыла икәнен беләбеҙ. Ә ҡайҙа дисциплина һәм яуаплылыҡ, унда маҡсатҡа өлгәшеү кимәле лә юғары була. Йәштәргә ошондай матур тәрбиә биреүгә нисегерәк өлгәшеп була икән?**

- Быны сере - берҙәм команданың һәм һәр кемдең бер уйҙа булыуында, эште еренә еткереп башҡарыуындалыр, тиеп уйлайым. Сибай институты иң яҡшы уҡыу йорттарының береһе булып танылған икән, быны нигеҙендә һәр йүнәлештә эҙмә-эзлекле, маҡсатҡа ярашлы эш алып барыу һөҙөмтәһе ята. Институттың тәүге көндәренән үк был яңы йүнәлештәге, йәғни белем, тәрбиә, рух, физик әүҙемлек тигән төшөнсәләрҙе үҙенә һеңдергән, эш комплекслы алып барылған уҡыу йорто булырға тейеш, тигән концепция һалынғайны. Һәм ошо йүнәлештә беҙ бына утыҙ беренсе яңы уҡыу йылын башлайбыҙ ҙа

***✓ Быйылғы уҡыу йылын яҡшы һөҙөмтәләр менән тамамланыҡ. Көндөҙгө бүлекте бөтөргән - 97, ситтән тороп уҡыу бүлегендә белем алған 346 студентҡа диплом тапшырҙыҡ, 40 студент институтты ҡыҙыл дипломға тамамланы.***

инде. Сибай институтында һәр хәрәкәт, һәр сара, һәр лекция, студенттың институт хеҙмәткәре менән һәр осрашыуы, аралашыуы ана шул тәрбиә, тәртипте булдырыуға йүнәлтелгән. Баштан, беренсе курстан уҡ, студенттарға уҡыу йортоноң төп ҡағиҙәләрен аңлатабыҙ, ә аҙаҡтан гел хәтерҙәренә төшөрәбеҙ. Шулай итеп, матур ғәҙәт формалаша.

Уҡыу йортонда ифрат күп саралар үткәрелә. Фәнни-ғәмәли конференцияларҙан тыш, төрлө осрашыуҙар, диспуттар, спорт ярыштары, акциялар һ.б. Был саралар ҡағыҙға яҙылған өсөн генә үткәрелергә тейеш, тигәнде аңлатмай. Уларҙың һәр береһенә оло мәғәнә, тәрбиә һалынған. Сараға ярашлы план төҙөлә, сценарий яҙыла, тейешле музыка һайлана. Шул саҡта ғына ниндәйҙер һөҙөмтә була, шул саҡта ғына студенттың күңеленә тәьҫир итергә мөмкин. Кеше эҙләнеүҙән, үсештән туҡтарға тейеш түгел. Шуға ла беҙҙең бөгөнгө талап - беҙгә килгән бала заманса белем алыу, тәртипле, тәрбиәле булыуҙан тыш, үҙенең сәләмәтлеген дә хәстәрләһен, спорт менән шөғөлләнһен, физик әүҙемлеген юғалтмаһын. Беҙ бөгөн шуны яҡшы аңлайбыҙ: физик сәләмәтлегендә үҙең хәстәрләгәндә генә, заман афәтенә ҡаршы тора алаһың. Тимәк, беренсе планға аң, күңел таҙалығы, мәрхәмәтлелек, хеҙмәт тәрбиәһе сыға.

Хеҙмәт тәрбиәһе тигәндән, шуны әйтә алам - беҙ быйыл студенттарҙың төҙөлөш отрядын тергеҙҙек, унда башлыса технология факультеты студенттары бик ихлас, тырышып эшләне. Студент отрядында хеҙмәт итеүҙең тағы ла бер әһәмиәтле яғы бар - ул да булһа, аҡса эшләү. Иң мөһиме - студенттар үҙҙәрен хеҙмәттә һынап ҡарай, ә хеҙмәт сынығыуы алған кеше тормошта ышаныслы аҙымдар яһай, ҡыйынлыҡтарға бирешмәй. Унан тыш, эш менән мәшғүл йәштәрҙең насар уйҙарға, алама ғәҙәттәргә ваҡыты ла ҡалмай, теләге лә булмай. Студенттар үҙҙәре отрядҡа "Арғымаҡ" тип исем ҡуштылар.

Шуныһы ҡыуаныслы, һәр идеяны бойомға ашырыр өсөн беҙҙә бөтә шарттар бар. Спорт менән шөғөлләнер өсөн бынамын тигән өс спорт залыбыҙ, стадион бар. "Ете ырыу", "Сармат" исемле халыҡ бейеүҙәре ансамблендә шөғөлләнгәндәр өсөн заманса балет залы, костюмдәр бүлмәһе булдырылған. Иҡтисадсы, хоҡуҡ белгесе, инженерҙар өсөн бейеү, ҡурайҙа уйнау нимәгә кәрәк, тиген һорау тыуыуы ла ихтимал. Уҡытыусы булараҡ шуны әйтә алам: сәхнәгә сыҡһа, студент үҙендә булған бөтә комплекстарынан ҡотола, йәғни үҙенең эске хәүефтәренән азат була. Бейеүҙе сәхнәләштереү алдынан да ҙур тәрбиәүи эш башҡарыла, йәғни бейеүҙең килеп сығыу тарихы, эстәлеге тураһында тулы мәғлүмәт бирелә, көйө менән таныштырыла. Быларҙың барыһы ла йәш быуында сәнғәткә, әҙәбиәткә, мәҙәниәткә ҡарата һөйөү, ихтирам тәрбиәләй.

"Һеҙҙең институттың коридорында йөрөп кенә белем алырға була",- тип әйткән ине бер яҙыусы беҙгә килгән бер сәфәрендә. Был ысынлап та шулай. Институттағы һәр барельеф, һәр композицияның үҙ тәғәйенләнеше бар, тигәндәй. Мәҫәлән, башҡорт шағиры Ш.Бабичтың 120 йыллығына арналған республика шиғыр конкурсы Бабич һәйкәленән старт алып, бөтә республиканы иңләп, беҙҙең уҡыу йортонда тамамланып ҡуйҙы. Быйыл бына Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың 180 йыллығын, Каруанһарай төҙөлөүгә арналған сараларҙы бына ошондай юҫыкта үткәрергә ниәтләп торабыҙ. Һаулыҡ һәм оҙон ғүмерлелек йылына арнап ниндәй генә саралар үтмәне беҙҙә. Бына ошондай саралар аша йәштәребеҙгә матур тәрбиә бирергә тырышабыҙ.

**➔ Һеҙҙең студенттар, тимәк, үҙойошоу тигән матур сифатҡа эйә. Был ғаиләнән киләме? Бөгөнгө атай-әсәйҙәрҙең балаларында ошондай матур сифаттар тәрбиәләүҙәге ролен нисек баһалайһығыҙ, әллә был сифаттар һеҙҙең уҡыу йорто коллективының эш һөҙөмтәһеме?**

- Атай-әсәйҙәрҙең балаларына матур тәрбиә биреүенә, әлбиттә ҡыуанып ҡарайбыҙ. Шуныһы һөйөнөслө, бөгөн Республика Хөкүмәте тарафынан да ғаиләгә, балаларға иғтибар бермә-бер артты. Был бик ҡыуаныслы ваҡиға, сөнки беҙ нисек кенә тырышмайыҡ, бөтә нигеҙ ғаиләлә һалына. Беҙ бына ошо ғаиләлә алынған матур өлгөнө артабан үҫтереп, камиллаштырырға, уны байытырға тырышабыҙ ҙа инде. Шундай матур тәрбиә биргән ата-әсә беҙгә балаһын ышанып тапшыра икән, беҙ уларҙың,балам сит-ят юлға баҫмаһын, урам тәрбиәһенә бирелеп китмәһен, тип борсолоуына юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ. Бөгөн үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, йәштәрҙе ылыҡтырыусы, ымһындырыусы нәмәләр бик күп. Шуға ла студенттарҙы күҙ уңынан ысҡындырмайбыҙ. Көндөҙ - дәрестә, төштән һуң төрлө секциялар, түңәрәктәрҙә шөғөлләнә улар. Дөйөм ятаҡта ла тәртип яйға һалынған. Студенттарҙың үҙидаралығы әүҙем эшләй. Уларға уҡыу йортоноң иң алдынғы, һүҙе үткәндәй лидерҙар йәлеп ителгән. Шулай итеп, Сибай институты студенттары аҙнаның һәр 7 көнөндә, 24 сәғәт буйы ныҡлы күҙәтеү аҫтында. Был студенттың иректәрен сикләү тигәнде аңлатмай, ә уларҙы иғтибар һәм хәстәрлек менән солғау билдәһе.

Ә бына "үҙойошоу" тигән төшөнсә күберәге беҙҙә һалына. Айырыуса беренсе курста. Иң күп саралар улар өсөн үткәрелә. Уҡыу йылы башланыу менән "Беренсе курстар айлығы" иғлан ителә. Был ай иң яуаплыһы, уның барышында белем усағы, бындағы түңәрәктәр, музей менән таныштырыла, уҡыу йортоноң етәкселеге, ҡала хакимиәте, хоҡуҡ органдары вәкилдәре менән осрашыуҙар үтә. Айлыҡ "Беренсе тапҡыр сәхнәлә" тигән сара менән тамамланып ҡуя. Был беренселәр өсөн йондоҙ сәғәте. Бына ошонда күренә лә инде студенттарҙың үҙойошоу сифаттары, сөнки сараны студенттар тулыһынса үҙҙәре алып бара, сценарий туплай, алып барыусыларҙы тәғәйенләй һәм байрамды башынан алып аҙағына тиклем ойоштора. Уҡытыусылар ҙа бик ярата был байрамды, сөнки нәҡ ошо сәхнәлә институтҡа кемдәр килеүе, ниндәй һәләткә эйә булыуҙары күренә.

**➔ Һеҙҙең студенттар республикалағы ғына түгел, ә Рәсәй кимәлендәге конкурс, бәйгеләрҙә лә сығыш яһай, еңеүҙәр яулай. Шуларҙы ла барлап китәйек әле.**

- Беҙ мегаполиста йәшәһәк тә, республика, Рәсәй кимәлендәге сараларҙан ситтә ҡалғаныбыҙ юҡ. Беҙ электән үк "Студенттар - иректе эшҡыуарлыҡта" тигән Бөтә Рәсәй проектында әүҙем ҡатнашабыҙ. Хәтерегеҙгә төшөрөп тә үтәйек әле: Сибай институты был проектта Рәсәй кимәлендә еңеп, 2008 йыл Сингапурҙа, 2012 йылда Ҡытайҙа Рәсәй намыҫын яҡлағайны. Быйыл да бик уңышлы сығыш яһаныҡ. Бынан тыш, технология факультеты студенты Тимур Агишев кикбоксинг, иҡтисад һәм хоҡуҡ факультеты студенттары Айнур Вәлитов менән Рөстәм Хәйбуллин көрәш буйынса Башҡортостан чемпиондары булды. Сәлим Мәхмүтов Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте, Назгөл Янбаева Башҡортостан Башлығы стипендияһына, Наҙгөл Ҡужагильдина М.Аҡмулла исемендәге премияға лайыҡ булды. Информатика һәм математика факультеты студенттары программалаштырыу буйынса Урал беренселегендә уңышлы сығыш яһаны, бөгөнгө көндә беҙҙекеләр "Иннополис Университеты" юғары уҡыу йортонда, "iВолга" йәштәр форумында уңышлы сығыш яһай. Педагогика факультеты студенттары Бөтә донъя фольклориадаһында тәржемәсе булып эшләне. Беҙҙең студенттар шулай уҡ йыл һайын Бөтә Рәсәй инвестиция һабантуйында сит ил ҡунаҡтарын ҡаршы ала һәм оҙатып йөрөй. Республика киң мәғлүмәт сараларының I конкурсында институт ТВ Гран-приға, "Юлдаш" гәзитаһы I дәрәжәләге Дипломға лайыҡ булды. 2017 йылдан алып "Артек" лагеры менән хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Студенттарыбыҙ унда йәйге практика үтә һәм бай тәжрибә туплауға өлгәшә.

**➔ Быйылғы ҡатмарлы шарттарҙа уҡыу йылын нисегерәк тамамланығыҙ?**

- Быйылғы уҡыу йылын бик яҡшы һөҙөмтәләр менән тамамланыҡ. Көндөҙгө бүлекте тамамлаған 97, ситтән тороп уҡыу бүлегендә белем алған 346 студентҡа диплом тапшырҙыҡ, 40 студент институтты ҡыҙыл дипломға тамамланы. Билдәле, тәүге ярты йыллыҡта уҡытыу дистанцион форматта алып барылды. Был һынауҙы ла беҙ уңышлы үткәреп еврҙек. Аудиториялар техник яҡтан заманса йыһазландырылған, бөгөн матди-техник базаны артабан камиллаштырыу өстөндәбеҙ, яңы компьютер техникаһы алдыҡ. Бөгөн мәғариф учреждениелары уҡытыусыларға ҡытлыҡ кисерә, шуға ла Урал арьяғы райондарының мәғариф идаралыҡтары менән тығыҙ бәйләнеш булдырҙыҡ, район мәктәптәре беҙҙә бер нисә тапҡыр камиллаштырыу курстары үтте. Сибай институты йылдар дауамында үҙ маҡсатына тоғро ҡалып, күптән инде Урал арьяғының мәғариф үҙәгенә әйләнде, тиһәк, һис тә хата булмаҫ.

**➔ Абитуриенттар өсөн ҡабул итеү имтихандары нисегерәк, ҡасан, ниндәй факультет, бүлектәргә ойоштоp ола?**

- Быйыл 250 бюджет урыны булдырылды, үткән йыл был һан 192 ине. Дүрт факультет та һөнәри йүнәлеш буйынса эште әүҙем алып барҙы. Көндөҙгө бүлеккә ҡабул итеү тамамланды. Ситтән тороп уҡыу бүлегендә студенттарҙы ҡабул итеү 25 октябргә тиклем дауам итә. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: беҙ тәүге тапҡыр инклюзив белем биреү буйынса белгестәр әҙерләй башланыҡ. Бының өсөн студенттарыбыҙға бөтә шарттар булдырҙыҡ.

Көндөҙгө һәм ситтән тороп белем алыуҙың түләүле нигеҙенә килгәндә, ул яҡынса 30-110 мең тирәһе тәшкил итә. Йәнә шуға иғтибар итергә кәрәк: уҡыу йорто етәкселегенең үҙенең ҡарары нигеҙендә был сумманың яртыһына тиклем кәметелеүе лә ихтимал. Әгәр студенттың Берҙәм дәүләт имтихандары һөҙөмтәһе юғары икән, уҡыу йортондағы төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнаша, уҡыу, олимпиада, конференция, фәнни эштәрҙә уңыштары булһа, комиссияның ҡарары нигеҙендә уҡыу өсөн түләгән аҡсаһының хаҡы кәметелеүе мөмкин. Бер һүҙ менән әйткәндә, беҙҙең уҡыу йортон һайлаусылар бер ваҡытта ла тормошта юғалып ҡалмай, үҙ урынын лайыҡлы таба.

**Рәүилә ХӘСӘНОВА**
**әңгәмәләште.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Друидтарҙың серен нисек ҡулланырға?

Друид Коннеда ғәҙәти кеше була. Кельт булараҡ, ул үҙҙәрендә йәшеренгән Алиһә көсөн нисек ҡулланырға белгән кельт ҡатын-ҡыҙҙары менән һоҡлана. Был ҡатын-ҡыҙҙар аҡыллы, үҙ-үҙенә ышанған һәм арбау һәләтенә эйә булған.

Бөгөн дә ошо боронғо аҡылға кинәйәләгән кельт музыкаһы тере. Бөгөнгө кельттар унда иртәгәне - сикһеҙ тормош бүләк итеүсе кельт музыкаһының тергеҙелеүен күрә.

Кельттарҙың рухи лидерҙары, друидтар, ул ваҡыттарҙа күрәҙәсе һәм аҡыл эйәһе тип һаналған. Улар мөғжизә тыуҙырған һәм мөхәббәттә күрәҙәлек иткән. Әммә төп эштәре илдең һәм ҡәбиләнең именлеген һаҡлау була. Бығa тылсымлы тип һаналған саралар аша ирешкән.

Әммә улар тылсым түгел, ә нисәмә быуаттар Иисус өйрәткән, кешеләр насар уҙләштергән һәм хәтерҙәрендә насар һаҡлаған һабаҡ була. Ул аҡылды үҙенсәлекле ҡулланырға өйрәтә: Аллаһҡа барығыҙ, булмышығыҙ менән Аллаһ тәҡүәләре кеүек булығыҙ, һәм һеҙгә бар нәмә килер.

Хәҙерге тел менән әйткәндә, Иисус уйҙарығыҙ менән үҙегеҙгә ҡайтығыҙ, булмышығыҙға ҡайтығыҙ, ти. Күҙ алдығыҙға килтерегеҙ, аҡса проблемалары хәл ителгән, сәләмәтлегегеҙ яҡшырған, ижади маҡсаттар яуланған. Нисек күҙаллайһығыҙ, шул ниәтегеҙ тормошҡа аша.

Друидтар заманында кешелә көстө ихтирам иткәндәр. Ябай кешеләр алдында үҙ аҡылының ижади мөмкинлектәре менән бүлешеү - улар менән идара итеүҙе юғалтыуға бәрәбәр булған. Бөгөн ғәҙәти булмаған ғәҙәти кеүек. Миллион, бәлки, миллиард кеше уйҙарҙың ижади көсө тураһында белә.

Шулай булғас, ниңә уны файҙаланмаҫҡа? Ни өсөн кешеләр аҡсаһыҙлыҡтан интегә һәм һөйөү теләген тыйып тора?

Яуап матди донъяның гипноз көсөндә, уның беҙҙең хистәребеҙҙе тартып алып, аңыбыҙҙы программалаштырыуында.

Киңлектең һәм ваҡыттың сиклелеге уйҙарҙың һәм тормоштоң сиклелегенә килтерә. Фекерләү, уйлау сиклелеге һөйөү һәм ижад итеү сиклелегенә килтерә. Һеҙ сикләүҙәрҙән үҙегеҙгә төрмә ҡораһығыҙ. Биш минуттан ул төрмәнең ишектәре бер ваҡытта ла ябылмағанды аңларһығыҙ.

Һеҙ ишекте асып, балҡып торған яңы - иҫ киткес бай һәм күрелмәгән мөхәббәт донъяһына инерһегеҙ. Был ике бәләкәй генә тәжрибә аша килер, улар мейегеҙҙең әлегә тиклем һеҙ уйлағандан ҙурыраҡ булыуына инандырыр. Аңығыҙ арҡаһында аңығыҙ үҙгәрер.

Аңығыҙ ярҙамында тәнегеҙ менән идара итә башларһығыҙ. Бының ысынбарлыҡ икәнлегенә инанғас, аңығыҙҙың ижади мөмкинлеген тәнегеҙҙән ситкә - йоҡо урын-ерегеҙгә һәм банк иҫәбенә йүнәлтерһегеҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

*БАШ ЭШЛƏТМƏК*

# 9 АВГУСТ - БӨТƏ ДОНЪЯ ЕРЛЕ ХАЛЫҠТАР КӨНӨ




**Йəмилə ШƏРƏФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**32-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тырыз. Юнысова. Ғəм. Аҡын. Дошман. Морат. Ырым. Лəстит. Теоретик. Банк. Тарб. Тана. Иртə. Окапи. Радар. Көрт. Йыр. Шатун. Əлəм. Аҡса.

**Вертикаль буйынса:** Мифтахов. Ғарипов. Теоретик. Юха. Өлəсəй. Арыш. Ылымыҡ. Артыш. Аят. Алма. Намыҫ. Дəрт. Завод. Ус. Дəүлəтбирҙина. Батый. Март. Нефтекама.

*ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА*

# КАЛЕНДУЛА



**Календула йəки бəйгəмбəр тырнағы - төрлө ауырыуҙарҙан дауаланғанда ҡулланылған иң популяр шифалы үҫемлектəрҙең береһе. Ашҡаҙан ауырыуҙары, эсəк шештəре һəм спазмалары, бауыр ауырыуҙары, ҡатын-ҡыҙҙар сирҙəре, аналыҡтан ҡан килеү, йөрəк ауырыуҙары, гипертония һəм климакс осоронда уның ярҙамына мөрəжəғəт итəлəр. Медицинала календула сəскəһенең төнəтмə һəм настойкаларының яман шешкə ҡаршы булыуын таныйҙар.**

**Яман шеш.** 3 литрлыҡ банканың яртыһына тиклем календула сəскəһен һалырға, шунан тултырғансы араҡы ҡойорға. Бер айҙан да кəм төнəтмəҫкə, шунан һығып алырға. Дауаны аналыҡ, түллек биҙе, йыуан эсəк, ашҡаҙан аҫты биҙе, ауыҙ-йотҡолоҡ, һөт биҙҙəре яман шештəре булғанда көнөнə 3 тапҡыр 1-əр балғалаҡ эсергə (мотлаҡ үлəн төнəтмəһендə). Əлбиттə һəр кешенең организм үҙенсəлектəрен иҫəптə тоторға кəрəк. Бында календуланың бактерицид, фитонцид, ҡанды таҙартыу һəм ауыртыуҙы баҫыу сифаттары ғына түгел, антибиотик булараҡ сулеманан һис ҡалышмауы ла əһəмиəтле.

**Аналыҡ муйыны эрозияһы.** 1 ҡалаҡ сəскəне 1 стакан һиптереп йыуҙырыу өсөн ҡайнар һыуҙа төнəтергə. Йəки 1 сткан ҡайнатылған һыуға ярты балғалаҡ спиртлы төнəтмə ҡойорға (əлбиттə, дарыухананан алынғанды түгел). Төнəтмəне ҡара əрем үлəне төнəтмəһенə йəки ҡырҡколас тамыры бешкəн һыуға ҡойһаң тағы ла яҡшы. Бер процедура өсөн 0,5 йəки 1 литр əҙерлəргə.

**Климакс.** Ашарҙан алда көнөнə өс тапҡыр ҡара бөрлөгəн япрағынан һəм мəтрүшкəнəн əҙерлəнгəн сəй ҡушып 30-ар тамсы эсергə.

**Аритмия.** 20-шəр тамсы төнəтмəне шəкəр киҫəгенə тамыҙып, ашағандан һуң 2 сəғəт үткəс ашарға. Əгəр төнəтмə булмаһа, аритмия булғанда һəм йөрəк көслө типкəндə 2 балғалаҡ календула сəскəһенə 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сəғəт төнəтергə. Көнөнə 4 тапҡыр яртышар стакан эсергə.

**Нефрит.** Календула сəскəһе һəм ҡесерткəн япрағын тигеҙ миҡдарҙа ҡушырға. Йыйылманың 1 ҡалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сəғəт төнəтергə. Көнөнə 3-4 тапҡыр ашағандан һуң 1 сəғəттəн яртышар стакан эсергə.

**Күҙ эсендəге баҫым.** 9 ҡалаҡ сəскəгə 1,5 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1-2 сəғəт төнəтергə. Көнөнə 3 тапҡыр, ашағандан һуң 1 сəғəт үткəс, яртышар стакан эсергə. Ошо уҡ төнəтмəне ауырыған күҙҙе йыуыу өсөн ҡулланырға.

**Иҫкəрмə.** Календуланы ҡулланырға ярамаған осраҡтың иң мөһиме - йөклөлөк. Борондан уҡ был үҫемлектең һутын əсə ҡарынындағы бала һендереүен һəм был уны юғалтыуға килтереүен белгəндəр. Шулай уҡ календула гипотония һəм брадикардия менəн ҡатмарлашҡан йөрəк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары булғанда ла ярамай.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Август (Мөхəррəм) | Иртəнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлə намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йəстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 16 (7) дүшəмбе | 4:25 | 5:55 | 13:30 | 19:14 | 20:44 | 22:14 |
| 17 (8) шишəмбе | 4:27 | 5:57 | 13:30 | 19:12 | 20:42 | 22:12 |
| 18 (9) шаршамбы | 4:29 | 5:59 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |
| 19 (10) кесе йома | 4:30 | 6:00 | 13:30 | 19:07 | 20:37 | 22:07 |
| 20 (11) йома | 4:32 | 6:02 | 13:30 | 19:05 | 20:35 | 22:05 |
| 21 (12) шəмбе | 4:34 | 6:04 | 13:30 | 19:02 | 20:32 | 22:02 |
| 22 (13) йəкшəмбе | 4:36 | 6:06 | 13:30 | 19:00 | 20:30 | 22:00 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЕЛМƏҺƏҢ - БЕЛ!*

# ШƏКƏРҘЕҢ ЗЫЯНЫ



**Шəкəрҙең зыянлы ризыҡ икəнен барыһы ла белə. Шəкəр ашағандан һуң ҙур күлəмдə энергия бүленə, аҙ хəрəкəтлəнгəн кешелəр уны ҡулланып та бөтə алмай. Əммə һимеҙлек - шəкəрҙең берҙəн-бер бəлəһе түгел. Уны артыҡ ҡулланыу хатта психик тайпылыштарға алып килеүе бар.**

Кеше көнөнə 9 балғалаҡтан артыҡ шəкəр ашаһа, ҡанда холестерин күбəйə, был иһə йөрəк ауырыуҙарына килтерə. Кəнфит, печенье, татлы һыуҙар ҡанда шəкəр күлəмен арттыра. Был гел генə ҡабатланһа, шəкəр диабеты сиренə юлығыу хəүефе бар. Шəкəр глюкоза һəм фруктозанан тора. Глюкоза организм өсөн кəрəк, əммə бында ла сама белеү мөһим, ул артыҡ булып китһə, май ҡатламдары барлыҡҡа килə. Фруктоза менəн эш ҡатмарлыраҡ. Ул организмға əллə ни файҙа килтермəй, əммə уның зыяны ҙурыраҡ. Фруктоза бауырҙа үҙлəштерелə һəм унда майға əйлəнə. Май бауырҙа йыйылып, бауыр дистрофияһына килтерə. Алкоголь менəн артыҡ мауығыу ҙа ошондай уҡ һөҙөмтəлəргə алып килə. Һуңғы 50 йылда донъяла шəкəр ҡулланыу өс тапҡырға артҡан.

ШАҢДАУ

# ЙЫРҘЫ ЙЫРТАЛАР...

## күңелде китәләр

**Июнь аҙағында сыҡҡан "Йырҙың йыртығы юҡ, тиһәләр ҙә..." тигән мәҡәләне уҡығас, баҫылғанға кире ҡайтып, йыр һәм йырсылар хаҡында үҙ фекеремде еткерергә булдым.**



Мәҡәләлә әйтелгәнсә, эйе, хәҙер кемдәр генә ниндәй генә ҡиәфәттә, кейемдә сәхнәгә ынтылмай, күп саҡ әҙәпте онотоп, ҡайһы саҡ маймыл кеүек ҡыланып, күңел болғата, музыкалары ҡолаҡты яра. Һүҙен, көйөн үҙҙәре яҙып, үҙҙәре йырлаусылар күбәйҙе. Етмәһә, күп саҡ фонограмма ҡулланып йырлайҙар. Төркөстан президенты фонограммаға йырлауҙы бөтөрөү хаҡында ҡуптән указ сығарҙы, бәлки, беҙгә лә шул указ кәрәктер?

Мин үҙем шиғыр яҙам, шуғалыр ҙа, тәү сиратта йырҙы һүҙҙәре өсөн яратам, мәғәнәле һүҙҙәр күңелгә үтә, моңландыра, уйландыра. Мәғәнәһеҙ һүҙҙәр йырҙы йырта, күңелде китә. Бында тәү сиратта йырҙың һүҙҙәрен яҙған шағирға, икенсе сиратта көй яҙғанда һүҙҙәренә иғтибар итмәгән композиторға үпкә белдерергә кәрәктер. Шағир, рифмаға тура килтерәм типме, ҡолаҡҡа ятмаҫ һүҙҙәр яҙа. Мәҫәлән: "Ант" төркөмө етәксеһе Алмаз Ғафаров: "Зөлфиә, кейәүгә сыҡ минә тиҙерәк, тыуыр игеҙәк", - тип йырлай. Ниндәй әҙәпһеҙлек, мәғәнәһеҙлек!

Тағы бер йырҙы алайыҡ: "Һин тип ҡайғында ҡосҡанмын, мин уны һин тип торам", имеш. Лаяҡлы иҫерек ир ҙә йығылмаҫ өсөн ҡайынды ҡосҡанда үҙ йәрен ҡайын менән бутамаҫ.

Ҡайһы бер шағирҙар, мәңгелеккә тыуған һымаҡ, йырға яҙылған шиғырҙарында әйләнгән һайын "мәңгелеккә һөйәм, мәңгелеккә килдем" кеүек һүҙҙәрҙе ҡуллана. Бер кем дә мәңгелек түгел. "Мәңгелек" һүҙен "гүмерлек" һүҙе менән алыштырғанда күңелгә ятышлы булыр ине. Бер саҡ үҙебеҙҙең мәҙәниәт йортонда бер ҡыҙ әсәһен юбилейы менән ҡотлап, "Мең йәшә, әсәй, мең йәшә" тип йырлап, үҙенсә ҙурланы. Әсәһе мең йәшкә етер ҙә, ҡыҙы уны күрә алыр микән? Шағир кеше нимә уйлап яҙған ул һүҙҙәрҙе, "йөҙ йәшә, әсәй, йөҙ йәшә" тип яҙып булмай инеме, йөҙ йәшкә етеүсе әсәйҙәр бар бит.

Хәҙер күп йырсылар сәхнәлә йырҙы башлап ебәрә лә, дауамын тамашасылар йырлауын һорап, микрофонды залға төбәй. Тамашасы аҡса түләп йыр йырларға түгел, йыр тыңларға килә бит. Үҙе йырларға ул мәжлестә ултырмай ҙаһа. Күп йырсылар концерттарға флешка менән йөрөргә күнегеп китте, ә ысын музыканттар сәхнә биҙәр ине бит.

Йыр хаҡында һүҙ ҡуҙғатҡанда, форсаттан файҙаланып, мәшһүр йырсылар хаҡында ла яҙып китке килә. Сәләймән Абдуллин, Рамазан Йәнбәков, Фәриҙә Ҡудашева кеүек шәхестәр 100 йылға, бәлки, бер тыуалыр. Әммә ошондай шәхестәргә иҫән саҡтарында ҙурлай белмәнеләр. Ерҙә, илде кеше данлай, кеше биҙәй. Ошо шәхестәргә ниңә Салауат Юлаев премияһы бирелмәне һуң, улар бит бик тә лайыҡ инеләр - шул күңелде ҡыра. Татарстан Фәриҙә апайға унда йәшәмәһә лә Ғабдулла Туҡай премияһы бирҙе, ә беҙҙекеләр ни ҡараған? Махсус йырсы белеме булмаған, әммә халыҡ араһынан сыҡҡан халыҡ йырсыһы Бибисара Азаматова апайыбыҙ хатта Башҡортостандың атҡаҙанған артисы исемен дә ала алмай үлеп китте, ә 17 йәшлек ҡыҙ "Голос" конкурсында бер тапҡыр ҡатнашып, ул данға лайыҡ булды. Әлбиттә, халыҡ һөйөүенән ҙур бүләк юҡ, үрҙә телгә алған сәхнә йондоҙҙарын халыҡ яратты һәм ярататаҡ.

Элегерәк Фәриҙә Ҡудашева, Рамазан Йәнбәковҡа Салауат Юлаев премияһы бирелмәгәнгә әсенеп, шиғыр яҙғайным, шуның һуңғы куплетын ғына яҙам.

*Илдең хужалары асыуланһын,*
*Әрләнәндәр әйҙә, әрләнәм.*
*Ошо ике бөйөк шәхестәргә*
*Салауат премияһы бирелмәгәнгә*
*Һеҙҙең өсөн мин бит ғәрләнәм.*

**Фәүкәт ҠОТЛОШИН.**
**Стәрлебаш районы**
**Иҫке Ҡалҡаш ауылы.**

ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ

# КҮҢЕЛ ТЫЙЫУҘАРЫ

**Тыйыуҙар күп төрлө. Ә өләсәйҙәр үҙенде бер тәртәлә тотоу, әҙәптән, тәүфиҡтан айырылмаҫ өсөн күңелдән генә ошо һүҙҙәрҙе әйтеп, тыйылып йөрөргә өйрәтә торғайны.**

• Ололанма, һылыумын, тип,
Һылыулығың һулып китер.
Ололанма, уңғанмын, тип,
Уңғанлығың бөтөп китер.
Ололанма, мин бейектә,
Һеҙ түбән, тип,
Бейеклегең түбән төшөр.
Шул сағында "түбәндәрең" нимә тиер?
Нимә тиһен, кафыр, тиер...

• Сәскәләр араһында сүп булма - тамырыңдан йолҡоп ташларҙар; сүптәр араһында сәскә бул - сүпте утарҙар, үҙеңә һоҡланырҙар.

• Һис үсекмә, ҡылтайма: ҡылтым кеше - ҡалтайған таҡта, йөйгә-ҡышҡы селләлә шартлап һына, юҡҡа сыға.

• Бейек ҡаяға менеп баҫҡас, куккә аштым, тип маһайма: ел-дауылдар ҡаяларҙы ла он-талҡанға әйләндерә.

• Алты ағаң теүәл булғанда,
Ыҫын дуҫтар булһа яндарыңда,
Йөрәгеңдә дәртең бар саҡта,
Рух ҡошоң әйҙәп торғанда,
Ут һүндермә һис тә усаҡта.
Утың һүнһә әгәр усаҡта,
Булмайһың бит донъяла ул саҡта...
Ут һүндермә һис тә усаҡта.

• Ғүмер аты бик йылғыр, теҙгенде лә, йүгәнде лә өҙөп ташлай, алға саба, туктау белмәй. Ә шулай ҙа:
Һис бошонма ғүмер уҙа, тиеп,
Һис уфтанма сәсем аҡ, тиеп.
Шатлан, ғорурлан, уҙған ғүмер юлым
Аҡ сәскәләй ап-аҡ, паҡ, тиеп.
Ҡалған йылдарым да, Алла бирһә,
Булыр әле паҡ һәм хаҡ, тиеп.

• Йүн сыҡһа, йүнләп, һүҙ сыҡһа, һөйләп ҡал.

• Киреләнмә: кире кеше кәкерәйеп үҫкән ҡарт ағас ул, уны балта менән киҫеп, юнырға ғына кәрәк.

• Соҡор төбөнән мәғдән эҙләмә: соҡор йотор, юҡ итер; хәләл аш биргән ерҙе онотма: атлатыр ҙа, данлар ҙа.

• Йәш инек - ҡыҙыл инек,
Ҡартайҙыҡ - алһыуландыҡ,
Индек сабый хөкөмөнә.
Раҫ йәшәйек Хоҙайҙың биргән көнөнә,
Шатланайыҡ һәр бер яҡты көнөнә,
Зарланмайыҡ ҡара, ҡыҫҡа төнөнә.
Теләйекҫе, бер Хоҙайҙан,
Иман менән индерһен, тип,
Киң һәм яҡты гүренә,
Һәм дә хисап биреүһеҙ йәннәтенең түренә.

• Һәр саҡ иҫеңдә тот: кешеләр һине кешегә һанаһындар өсөн Кеше бул.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА архивынан.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АЛТЫН ЭЙӘР ҺАЛҺАҢ ДА...

## ишәк - ишәк инде

Теләнсе оятын кеҫәһенә һалған, ул да йыртығынан төшөп ҡалған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: Будда аҙыҡтан ағыуланып үлгән. Бына нисек була был хәл. Будданы ҡунаҡҡа саҡырыу мөмкинлеген бер ярлы кеше оҙаҡ көткән, ти. Һәм, ниһайәт, бер көн был фәҡир Будданы беренселәрҙән булып өйөнә саҡырыу өсөн ул йоҡлап ятҡан ағас төбөнә таң һарыһынан килеп баҫҡан ти. Будда күҙҙәрен асыу менән фәҡир кеше: "Минең саҡырыуымды ҡабул ит инде! Мин оҙаҡ йылдар һине үҙемдең ҡунағым итеп күрергә хыялландым һәм был көндө түҙемһеҙләнеп көттөм" - тигән. "Килермен!" - тип яуаплаған Будда. Тап ошо мәлдә ярандарын эйәртеп, урындағы батша килеп еткән һәм Буддаға: "Мин һине һарайыма ҡунаҡҡа саҡырам. Хөрмәт күрһәт миңә"- тигән. Әммә Будда: "Бөгөн килә алмайым. Һинең һарайыңа уҡыусыларым барыр, мин иртән иртүк бер фәҡиргә ҡунаҡҡа барырға вәғәҙә иттем", - тип яуап биргән. Будданы ҡунаҡҡа саҡырған был ярлы кеше нимә менән шөғөлләнгән һуң? Һиндостандың бөтә төбәктәрендә лә, шул иҫәптән Бохарала ла, яуындар осоронда кешеләр төрлө үләндәр йыя. Шул иҫәптән кукармутта тип аталған бик һирәк бәшмәкте лә йыйып киптерәләр, һуңынан уны йыл дауамында йәшелсә кеүек ашайҙар. Әммә ҡайһы ваҡыт был бәшмәк ағыулыға әйләнергә мөмкин. Бахыр фәҡир быны белмәй һәм Будда өсөн ошо бәшмәкте йыйып бешерә. Будда ризыҡты тәмләп ҡарау менән әсе тәм тоя. Тик был бәшмәк табынға ҡуйылған берҙән-бер ризыҡ була, фәҡирҙең көйәфен төшөрмәҫ өсөн Будда ағыулы ашты ашай. Ярлының бәхетенең сиге булмай. Будда өйөнә ҡайта, ағыуҙың тәьҫире көсәйә барғанын тоя. Табиб килә һәм ағыуҙың ҡанға китеүен, Будданы ҡотҡарып ҡалып булмаҫағын хәбәр итә. Будда уҡыусыларын йыйып ала ла: "Был фәҡир ябай шәхес түгел. Сөнки был донъяла тәүге ризыҡты миңә әсәйем бирҙе, ә һуңғыһын - ул. Әсәйем миңә был тормошҡа аяҡ баҫырға ярҙам итте, ә был кеше миңә теге донъяға күсергә ярҙамлашты. Һеҙ был фәҡиргә ихтирам менән бағырға тейешһегеҙ", - ти. Был һүҙҙәр уҡыусыларын бик тулҡынландыра, ә Ананда исемлеһе хатта: "Уға һинең әсәйеңдә ихтирам иткән кеүек мөнәсәбәт күрһәтеү мөмкин түгел. Ул бит үлтереүсе! Уны язаға тарттырырға кәрәк!" - тип яуаплай. Был ваҡытта Будда тирәһендә тик иң яҡын уҡыусылары ғына ҡалған була, һәм Будда уларға: "Мин һеҙҙең был бахырҙы үлтерә алыуығыҙҙы беләм, әммә мин әйткәнсә эшләгеҙ. Был - бөйөк алхимия! Буддаға хатта ағыу биргән ваҡытта ла ул ағыуҙан мөхәббәт барлыҡҡа килергә тейеш!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
13 август 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 916